ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 ноябрь (ҡырпағай) 2017

№46 (776)

15 йыл

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Миллиардерҙар арттан һайын,**

ил дә байыһын ине ул...



3

**Миңлеямал инәй һандығы...**

әллә күпме серҙәр һаҡлай



6

**Шәриф Манатов**



7

**Барыбыҙ ҙа ҡайтыр инек...**

республика беҙҙе ҡаршыларға әҙер булһа әгәр



8-9

**ТВ-программа** 14

*Сабып сығып сал быуаттар аша,*
*Сапсындырып суйын саптарын,*
*Оран һалып илгә, һай, Салауат*
*Мәңгелеккә әйҙәй сафтарын.*

*Аҡмағандай кире Ағиҙелкәй,*
*Сүкмәгәндәй ергә Уралтау,*
*Салауаттың йыры тынмаç илдә,*
*Еңә алмаç рухын ҡорал-дау.*

**Рәми ҒАРИПОВ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Салауат Юлаев һәйкәле 50 йыл буйына баш ҡалабыҙҙың рухиәт үҙәге һәм ғорурлығы булып, халыҡтарҙы берләштереп тора. Кала һәм республика халҡының да, Өфөгә килгән ҡунаҡтарҙың да иң яратҡан урыны был. Дуҫтарығыҙ һәм таныштарығыҙға, балаларығыҙға ошо һәйкәл хаҡында ниҙәр һөйләр инегеҙ?

***Ирек ЯЛАЛОВ, Өфө кала округы хакимиәте башлығы:*** Салауат Юлаев шәхесе Башҡортостанда ғына түгел, беҙҙән ситтә лә киң билдәле. Беҙҙә Салауат районы, ҡалаһы, уның исемендәге Дәүләт премияһы, хоккей командаһы, һәйкәлдәр бар. Салауат Юлаевҡа Өфөләге һәйкәл бөтөн Европала иң ҙурҙан иҫәпләнә. Ул күптән инде баш ҡалабыҙҙың визит карточкаһына әйләнде. Һәйкәл һүрәтләнеше республикабыҙ Гербына ла төшөрөлгән. Өфөгә килгән ҡунаҡтар мотлаҡ Салауат һәйкәленә бара. Күптәребеҙҙең, шулай уҡ ошонда булып киткән кешеләрҙең архивтарында Салауат Юлаев һәйкәле янында төшкән фотолары ҡәҙерләп һаҡлана. Үткән быуаттың 80-се йылдарында хеҙмәттәштәр менән миңә ошо һәйкәлде ремонтлау эштәрендә ҡатнашыу бәхете тейҙе. Ул саҡ беҙ һәйкәлде коррозиянан таҙарттыҡ, яҡтыртҡыстарҙы яңырттыҡ. Ярты быуат эсендә һәйкәл торған ҡалҡыулыҡ элеккегә ҡарағанда бейегерәк тә, текәрәк тә итеп эшләнде. Нигеҙҙең әкренләп сүгеү процесын туҡтатыу өсөн күп кенә көс һалырға тура килде. Хәҙер был йәһәттән бөтәһе лә яҡшы, былдай хәлдә һәйкәл кәмендә тағы ла 100 йыл халҡыбыҙҙы һөйөндөрөп торасаҡ әле. Иманым камил, Салауат Юлаев һәйкәленең 50 йыллығы көндәрендә лә өфөләр мотлаҡ батырыбыҙ янына күпләп киләсәк, өлкән быуын үҙ иҫтәлектәрен йәштәр менән уртаҡлашасаҡ. Сөнки ул һәйкәлдең тыуыу, ошонда урынлаштырылыу тарихын иҫләгәндәр бар бит әле. Беҙ ҙә яңыраҡ һәйкәлдең авторы, осетин халҡының бөйөк улы Сосланбәк Тавасиевтың ҡыҙҙары биргән документаль фильм аша ул саҡтағы ваҡиғаларҙы тамаша ҡылып һоҡландыҡ. Бөтә ҡала халҡы йыйылған булған бит ул тантанаға, Өфө урамдарына һыймай, сафтарға теҙелеп әлеге майҙанға ағылғандар. Тимәк, ысынлап та ҙур ваҡиға булған был һәйкәлдең Ағиҙел ярында барлыҡҡа килеүе. Быны бөгөн унан кеше аяғы өҙөлмәүе лә раçлай.

***Өлфәт КОБАҒОШОВ, рәссам һәм скульптор, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Дөрөҫөн әйткәндә, Салауат батыр хаҡында кемгәлер һөйләп тороу ҙа кәрәкмәйҙер, уның кем икәнен бәләкәй генә балаларҙан алып, бөтәһе лә белә. Был героик шәхес күптән рухи символыбыҙға әйләнгән, шул иҫәптән уға һәйкәл дә. Тап ошо үлмәç образдың республикабыҙ Дәүләт гербында һүрәтләнеш алыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләп тора. Эйе, батырыбыҙға һәйкәл асылыуға ярты быуат ваҡыт үтеп тә киткән, ләкин уның авторы скульптор Сосланбәк Тавасиев уны шунда уҡ эшләгән дә килтереп тә ҡуйған, тип уйлау дөрөç түгел, әлбиттә. Халҡыбыҙ рухына ауаздаш милләт вәкиле - бөйөк осетин Сосланбәк Дафай улы башҡорттоң ҡаһарманы Салауат образын, ысын ижад кешеһе булараҡ, бик оҙаҡ күңелендә йөрөтә һәм һәйкәлде тотош 30 йыл буйына эшләй: төрлө варианттар, проекттар араһынан иң яҡшыларын һайлап, ваҡыт үтеү менән ошо темаға ҡайта-ҡайта, уларға яңынан-яңы штрихтар, төҙәтмәләр индерә. Башҡортостанда йыш булып, башҡорт халҡы менән яҡындан аралаша, улар фекеренә ҡолаҡ һала-һала, ошо мөхиткә үтеп инеүгә, халҡыбыҙҙың бөйөк рухын төшөнөүгә өлгәшә скульптор. Әлбиттә, бөтөн таланттар яҙмышындағыса, һәр төрлө ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сығырға тура килә Сосланбәк Тавасиевҡа. Һәйкәл әҙер булғандан һуң да бит әле уның урынын тәғәйенләү буйынса ла үҙ фекерен яҡлап, байтаҡ яғалашырға тура килә был талант эйәһенә. Һәм, ниһайәт, барыбер үҙе әйткәнсә - тәбиғи нигеҙгә, Ағиҙелдең бейек ярына урынлаштырыуға өлгәшә. Башҡорт батыры рухын үҙ иткән ныҡышмал Кавказ улына тау һәм ҡаялай ныҡлығы, саялығы ярҙам итә. Ваҡыт та шымарта, камиллаштыра шулай ижадсыны ла, уның әҫәрен дә. Һәм тап ошо эше скульптор Тавасиевтың иң уңышлы ижад өлгөһө булып таныла. Салауат Юлаев һәйкәле өсөн 1970 йылда С. Тавасиев СССР Дәүләт премияһына лайыҡ була. Был иһә ил, дәүләт етәкселеге баһаһы ғына түгел, ә ысын халыҡ һөйөүе лә икәнлекте дәлилләй.



**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу компанияһының иң ҡыҙыу мәле. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● **Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек.** Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға. Бының өсөн һеҙгә почта бүлексәһенә инеп, йә почтальонға мөрәжәғәт итеп, **50665** индекслы "Киске Өфө"гә - **559 һум 56 тингә** яҙылырға ғына ҡала.

● **Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ.**

Октябрҙә 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ:



Учалы районы Сораман ауылынан Зөбәйҙә Ҡәләмова - **"Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**; Туймазы районы Дуҫлыҡ ауылынан Рәсилә Баһманова - **Т. Кусимованың "Башҡорт исемдәре"**; Межгорье ҡалаһынан Зөлфәр Ғизәтуллин - **"Башҡорт халыҡ эпосы "Урал-батыр"**; Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылынан Гөлдәр Шафиҡова, Баймаҡ районы 1-се Әтҡол ауылынан Бибисара Мәхмүтова - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**; Мәләүез ҡалаһынан Мәрйәм Күсмәева - **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың "Әҫәрҙәр. Хеҙмәттәр"**; Әбйәлил районы Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин - **Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө"**; Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Людмила Зиннурова, Архангел районы Аҙау ауылынан Фәнис Ғөбәйҙуллин - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан"**; Сибай ҡалаһынан Нурғәле Юнысов - **Хисмәт Юлдашевтың "Һуҡмаҡ"**; Баймаҡ районы Ғүмәр ауылынан Йосоп Үҙәнбаев - **Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре"**; Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Роберт Ғәйзуллин - **Әнисә Таһированың "Киске шәфәҡ йыры"**; Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Гөлшат Фәтҡуллина - **Әлфиә Әсәҙуллинаның "Хыял осошо"**; Баймаҡ районы Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, Иҫке Сибай ауылынан Миңлегөл Усманова, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылынан Флүрә Ғәлимова, Мәләүез районы Арыҫлан ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов, Ейәнсура районы Үтәғол ауылынан Нәйлә Нияҙғолова - **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ булды.

Ноябрҙә 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан кемдәрҙер ошондай уҡ китаптарға эйә буласаҡ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Салауат Юлаев һәйкәле 50 йыл буйына баш ҡалабыҙҙың рухиәт үҙәге һәм ғорурлығы булып, халыҡтарҙы берләштереп тора. Ҡала һәм республика халҡының да, Өфөгә килгән ҡунаҡтарҙың да иң яратҡан урыны был. Дуҫтарығыҙ һәм таныштарығыҙға, балаларығыҙға ошо һәйкәл хаҡында ниҙәр һөйләр инегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Рәшит ШӘКУР, яҙыусы, ғалим, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Халыҡ батыры Салауат Юлаев хаҡында яҙған бер мәҡәләмдә мин уны милләтебеҙҙең рухи символы тип атағайным. Ул беҙҙең бихисап ижад өлгөләрендә генә түгел, йөрәктәребеҙҙә лә йәшәй. Һәр беребеҙ күңелендә үҙ Салауатына ғүмерлек һәйкәл ҡуйған. Башҡортостан символдарының береһе - һылыу Ағиҙелдең текә ярына ҡуйылған Салауат Юлаевтың һәйкәле ярты быуат инде бына баш ҡалабыҙҙы бөтөн донъяға танытып, балҡып тора - беҙгә шуныһы менән дә ҡәҙерле ул. Элгәрерәк - Советтар Союзының, хәҙер инде Рәсәйҙең ҡайһы ғына төбәгенә барма, үҙеңде, мин башҡорт, тип таныштыраһың икән, шунда уҡ: "О-о, Салауат Юлаев!" - тип һоҡланыуҙарын белдерәләр. Шул да күңелгә ятышлы: баш ҡалабыҙға аэропорттан килһеңдәрме, тимер юл буйлап поездамы, әллә оло юлдан автобус-машиналарҙамы - батырыбыҙ һәйкәле алыҫтан уҡ күренеп, бөтәһен дә сәләмләп ҡаршы ала; Өфөнән сығып киткәндә лә, хәйерле юл теләгәндәй, хушлашып, оҙатып ҡала. Өфө тигәндә, иң тәүҙә Салауат һәйкәле күҙ алдына баҫа. Һис шикһеҙ, баш ҡалабыҙҙа Салауат рухы йәшәй.

Һуңғы йылдарҙа һәйкәл майҙаны танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе, тағы ла матурланды: йәшеллеккә, шау сәскәләргә күмелде. Был йәһәттән Өфө ҡала хакимиәтенә рәхмәт, һәйкәл тирәһе ҡараулы, таҙа тотола. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел, Өфөнөң йөҙө, рухи үҙәге бит был. Баш ҡалаға килгән бер кеше Салауат һәйкәленә барып, уны күрмәйенсә ҡайтып китмәй: күңел ихтыяжы тарта бында беҙҙе. Ә ситтән килгән ҡунаҡтарға ул башҡорт рухын танытып тора. Халҡыбыҙ бөйөклөгөн тап Салауатҡа ҡарап таныйбыҙ, уның рухы менән илһамланып йәшәйбеҙ, ижад итәбеҙ. Бының ысынлап та шулай булыуын батырыбыҙҙың мөһабәт образын кәүҙәләндергән, уны үлемһеҙ иткән әҙәбиәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, ауыҙ-тел ижады хазиналары ла асыҡ һөйләп тора. Әйтеп китеүемсә, әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәтебеҙҙә милли батырыбыҙ образын һынландырмаған бер генә өлкә лә, жанр ҙа юҡ: романдарыбыҙ ҙа, шиғыр-поэмаларыбыҙ ҙа, операбыҙ ҙа, һынлы сәнғәт өлгөләре лә - бөтәһендә лә Салауат рухы йәшәй. Әйткәндәй, үҙ батырын башҡорт үҙе лә данлай, уның тиңһеҙ ҡаһарманлығы менән рухланып ижад итеүселәр араһында башҡа милләт әһелдәре лә бик күп: билдәле рус совет яҙыусыһы Степан Злобин ("Салауат Юлаев" романы), рус совет рәссамдары А. Лежнев ("Салауаттың Михельсон отряды менән бәрелеше"), П. Лебедев ("Салауат станы", "Ҡурай хаҡында легенда"), А. Кузнецов ("Салауаттан һорау алыу"), А. Тюлькин ("Салауат өйө"), шулай уҡ билдәле скульптор, Башҡортостандың халыҡ рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты Тамара Нечаева, совет кинорежиссеры Яков Протазанов ("Салауат Юлаев" фильмы) һәм башҡа бик күп билдәле шәхестәр бар. Шул уҡ ваҡытта Салауат образы осетиндың бөйөк улы Сосланбәк Тавасиевты ла илһамландыра. Ғәҙәттә, бөйөк шәхестәр бөйөктәр рухына тартыла. Был ижадсылар менән дә шулай була. Салауатты данлап, уны күтәрҙеләр, ә Салауат уларҙы күтәрҙе һәм данға күмде.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**











## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Төркиә Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Хөсәйен Дириоз менән осрашты. Осрашыу барышында яҡтар сәнәғәт, сауҙа-иҡтисади, ғилми һәм мәҙәни өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек перспективаларын тикшерҙе. Рөстәм Хәмитов илсегә "Апимондия" халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһы конгресын уҙғарған саҡта Төркиә партнёрҙарының республикаға ныҡ ярҙам иткәндәре, 2021 йылда форумды уҙғарыу хоҡуғына Башҡортостан кандидатураһына булышлыҡ итеп, ҙур эш ойоштороуғандары өсөн рәхмәт әйтте.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Илшат Фәзрахманов Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Башҡортостан Республикаһының ауыл хужалығы министры итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Республикаһы Башлығының икенсе Указы менән Ирек Мөхәмәтдинов икенсе эшкә күсеү сәбәпле Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһынан бушатылды.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың бойороғо менән Азат Йыһаншин Башҡортостан Республикаһы Ветеринария идаралығы етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Башлығының икенсе бойороғо менән Вәкил Буранбаев икенсе эшкә күсеү сәбәпле Башҡортостан Республикаһы Ветеринария идаралығы етәксеһе вазифаһынан бушатылды.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Башҡортостан Республикаһының Мәғлүмәтләштереү һәм "Асыҡ Республика" системаһының эш итеүе мәсьәләләре буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп Рәсүл Таипов тәғәйенләнде. Таипов Рәсүл Рафанир улы 1981 йылдың 27 майында Өфөлә тыуған. 2003 йылда "Тарих" һөнәре буйынса Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаған. Тарих фәндәре кандидаты.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың указы менән Марат Шәрәфетдинов Башҡортостан Республикаһының урман хужалығы министры итеп тәғәйенләнде.Шәрәфетдинов Марат Искәндәр улы 1975 йылдың 21 февралендә Йәрмәкәй районының Йәрмәкәй ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлаған. 2010-2017 йылдарҙа - Башҡортостан Республикаһы урман хужалығы министры урынбаҫары.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Яңыраҡ үҙәк гәзиттәрҙең береһендә "Рәсәйҙә долларлы миллиардерҙар донъялағыға ҡарағанда тиҙерәк арта", тигән хәбәр баҫылып сыҡты. Ябай халыҡ өсөн файҙаһы булмаһа ла, үҙенсә яңылыҡ инде - ниндәйҙер мәғлүмәт бирелә бит. Шуның менән ҡуй икән дә - юҡ, хәбәрсенең шатлығы эсенә һыймай, әйтерһең дә, үҙе миллиардер булған! "Беҙгә хәҙер маҡтанырға ла була, - тип сәсәй был, - 2016 йыл һөҙөмтәһе буйынса Рәсәйҙә долларлы миллиардерҙар 19 кешегә артҡан. Улар 77 кеше ине, хәҙер - 96. Үҫеш 25 процент - донъя күрһәткесенән дә юғарыраҡ".**

# МИЛЛИАРДЕРҘАР АРТҠАН ҺАЙЫН,

## ил дә байыһын ине ул...

Ярай ҙа ти, хуш, артабан ни? Һығымта шул: миллиардерҙар үрсеүе буйынса беҙ "бөтөн планетала алда" барабыҙ, имеш... Шул да булдымы шатлыҡ! Ә миҙалдың икенсе яғы - ил иҡтисадының бер урында тапаныуы, ябай халыҡтың фәҡирләнә барыуы буйынса, уның ҡарауы, беҙ Ер шарында нисәнсе урында киләбеҙ икән? Бына ошо күрһәткес буйынса иң алда барһаҡ, шунда булыр ине шатлыҡ ҡына түгел - бәхет. Ә былай, байҙың байый барыуынан илгә ни ҙә, беҙгә ни? Әлбиттә, кеше шатлығына ҡыуана белеү - һәйбәт сифат, тик ана шундайыраҡ, мәҫәлән, 200 һәм 2000 меңлек купюралар баҫып сығарыу, ниһайәт, Рәсәйҙә iPhone X кеҫә телефондарының һатыла башлауы кеүек ҡыҫыр шатлыҡтар ябай халыҡ хәлен бер ҙә еңеләйтмәй. Өҫтәүенә, олигарх һәм миллиардерҙарҙың "рәсәйсә" генә байыу әмәлдәре барын да беләбеҙ. Сит ил миллиардерҙарын бына, исмаһам, ихтирам итергә лә була, сөнки улар хәләл көстәрен түгеп байый, урлашмай, ябай халыҡты таламай. Улай ғына ла түгел, улар байлығын ил һәм халыҡ мәнфәғәтендә эскерһеҙ сарыф итә: дауаханалар аса, медицина тармаҡтарын үҫтереүгә, яңы технологиялар һәм аппаратуралар булдырыуға тотона, шәфҡәтлелек фондтарына күсерә һ.б. Мәҫәлән, ер йөҙөндә иң бай миллиардерҙарҙың береһе Билл Гейтс һәм уның ҡатыны Мелинда шәфҡәтлелек фондына байлыҡтарының яртыһын тотонорға тип хәл иткән. Уларҙың был башланғысына Майкл Блумберг, Марк Цукерберг һәм... ғәжәп! - берҙән-бер рәсәйле Владимир Потанин ҡушылған. Тик Рәсәйҙең башҡа байҙары был кешелекле һәм изге ғәмәлде бар тип тә белмәй, сит илдәрҙә экзотик утрауҙар, зиннәтле һарайҙар, яхталар, самолеттар һатып алып, йәш ҡатындарға өйләнеп, типтереп донъя көтә.

Шул уҡ ваҡытта беҙҙең илдә иҡтисад өлкәһендә бил бөгөүсе ғаләмдең биштән бер өлөшө, йәғни 12 млн кеше, эшләп йөрөгән хәлдә лә фәҡирлек сигенән сыға алмай икән. Был ҡатламға айына 13 мең пенсияға мөрхәтһенеүсе өлкән йәштәгеләрҙе лә килтереп ҡушһаң... Халыҡ елкәһенә туҡтауһыҙ түләүҙәр, һалымдар яуып ҡына тороуы ла хәлде киҫкенләштерә. Мәҫәлән, быйыл бик күптәр күсемһеҙ милеккә кадастр хаҡынан тотолоусы һалым суммаһын күреп, ғәжәпкә ҡалғандыр. Кисә генә күршем зарланып торҙо. 70 кв.метр майҙанлы фатирҙың яртышар өлөшөн хосусилаштырып, ҡыҙы менән йәшәйҙәр. Пенсионер булараҡ, ошо милкенә һалым түләүҙән азат ителһә лә, ҡыҙының исеменә быйыл меңдән ашыу суммаға һалым ҡағыҙы килеп төшкән. "Ошоға тиклем ни бары 25-30 һумдан артмай ине, 2016 йыл өсөн һалым 40 тапҡырға артҡан", тип аптырай күршем. "Күңеләнде киң тот, күршекәйем, киләсәктә был бер мең бүстәк булып күренәсәк", тип әйткем килде уға. Һәр хәлдә, быныһы сәскәһе генә шул әле. Һалым суммаһы йыл һайын арта барасаҡ: быйыл милкенең кадастр хаҡы буйынса икенсе йыл түләүселәр һалымдың тулы ставкаһының 40 процентын кеҫәһенән сығарып һалһа, бер йылдан - 60, ике йылдан - 80 процентын һәм, ниһайәт, 2020 йылдан уны тулыһынса түләй башлаясаҡ. Ә алдағы ошо өс йыл эсендә генә ябай халыҡтың килеме артып китмәйәсәге көн кеүек асыҡ - бына шунда ни булыр? Бынан тыш, сиратта - ер участкаһы, дача һәм транспорт сараһы өсөн һалымдар көтә, һуңлатһаң, пени сәпәйәсәктәр. Әйткәндәй, әлеге күршем фатиры өсөн түләмәһә лә, үҙ исемендәге 6 сотый баҡсаһы ере өсөн 2015-2016 йылдарға 882 һәм плюс 32 һум пени түләп ҡайтты. Ҡыҫҡаһы, ошо йылдың 1 декабренә тиклем һалымдарыңды түләп ҡотолмаһаң, тыныс йоҡо юҡ, тигән һүҙ.

Һалым күләмдәрен уны кадастр хаҡынан иҫәпләү һәм ошоға тиклем файҙаланылған ташламаларҙы юҡҡа сығарыу юлы менән арттырыу физик шәхестәргә генә түгел, биналар милекселәре булып торған һәр төрлө ойошмаларға һәм бизнес өлкәһенә лә ҡағыласаҡ. Күптән түгел ошо хаҡта БР Финанс министрлығының "Милеккә һалым тураһында" республика законына үҙгәрештәр проекты БР Дәүләт Йыйылышы ултырышында хупланды.

Ә бына байҙарҙан күберәк һалым түләтеү мәсьәләһендә Дәүләт Думаһы депутаттары һаман да үҙ һүҙен өҙөп кенә әйтә алмайынса аҙаплана. Дөрөҫөн әйткәндә, улар һаман әле байҙарҙың ярлыларҙан ниməһe менән айырылыуын аңлай алмай. Аңлашыла ки, һалым тигәндә, үҙҙәренең дә бигүк бай күренгеләре килмәйҙер. Нимә ул байлыҡ - бына нимә өҫтөндә 7 йыл инде баш вата улар. Хаҡы 4,5 млн һум торған милек - байлыҡмы, юҡмы? Эш шунда - байлыҡҡа һалым тураһында закон өсөн Дума һуңғы тапҡыр 2010 йылда тауыш биргәйне, ләкин ана шул "байлыҡ" төшөнсәһенең ни кимәлдә булырға тейешлеген асыҡлай алмау арҡаһында туҡталып ҡалдылар. Һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, рәсәйҙәр ошо әйберҙәргә эйә милекселәрҙе бай тип иҫәпләй: яхталар, элиталы күсемһеҙ милек, шәхси самолеттар, ҡиммәтле автомобилдәр, аҫыл металл һәм таштарҙан биҙәүестәр, сәғәттәр. Рәсәйҙәрҙең яртыһынан күберәге (53 процент) - айына 1 млн килеме булған кешеләрҙе, 36 процент - 1-3 миллионғаса, ә һәр унынсы респондент 5 миллиондан башлап килемлеләрҙе байҙар иҫәбенә индерә. Ләкин халыҡ һәм йәмәғәтселек фекере күптән абруй түгел беҙҙә. Аңлашылыуынса, байлыҡҡа һалым тигән нәмәне шым ғына онотторорға иткәндәйҙәр. Уның урынына ҡиммәтле транспорт сараларына (3 миллионлыҡтан алып) һалым ставкаһын арттырыу хәҙер байлыҡҡа "шартлы һалым" тип атала икән. Ахырҙа, бөтәһе лә РФ Президенты кәңәшсеһе Герман Клименко әйткәнсәрәк булыр. Бына рәсми рәүештә нимә тип белдерә ул:"Мин һалымдарҙы ҡыҫҡартыу яҡлы (байҙарға ҡарата әйтелә, күрәһең - **Ф.И.**). Йәмғиәттең бер өлөшөнөң "тартып алырға һәм бүлешергә" ынтылышын да аңлайым, ләкин беҙҙә был хәл булды инде". Кәңәшсе алдына сығып, башҡа төрлөрәк хәбәр һөйләп тороуҙың файҙаһыҙлығын мин дә аңланым шикелле. Хатта ки МВД полковнигы Захарченкоға уның тоҡ-тоҡ миллиардтарын, ғәфү үтенеп, кире ҡайтарып бирһәләр ҙә аптырарға түгел бөгөн... Ошо тәңгәлдә яҙыусы Әхмәр Гүмәр -Үтәбайҙың "Киске Өфө" һандарының береһендә баҫылып сыҡҡан "Кәфендең кеҫәһе юҡ" тигән мәҡәлә-ишараһы иҫкә килеп төшә лә - тынысланам: ә ниңә, прогрессив һалым бер миңә генә кәрәкме ни? Әйҙә, шаша ғына бирһендәр, уның ахыры - бер инде. Ана, заманында донъя шаулатҡан Березовскийҙың кемлеген дә, гонаһ шомлоғо, ҡәберенең ҡайҙа икәнлеген дә онотҡандар, ти...



**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре, БАССР-ҙың Үҙәк башҡарма комитеты рәйесе Хафиз Ҡушаев һәм БАССР-ҙың Халыҡ комиссарҙары советы рәйесе Муллайән Халиҡовтың иҫтәлеген мәңгеләштерергә тәҡдим ителәр. Уларҙың республика алдындағы хеҙмәттәре өсөн Мәҙәниәт министрлығына Башҡортостандың Милли музейында (БАССР Хөкүмәтенең элекке бинаһы) мемориаль таҡтаташ ҡуйырға тигән тәҡдим булды.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә Башҡортостан автономияһы декларацияһы тураһында фармандың 100 йыллығына бағышланған сара үтте. Сарала ҡатнашыусылар Башҡортостандың район һәм ҡала хакимиәттәренә республиканың 100 йыллығын билдәләү буйынса саралар планын әҙерләгәндә Башҡортостан дәүләтселегенең барлыҡҡа килеүенә ҙур өлөш индергән күренекле яҡташтарының иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса саралар, тематик стендтар һәм экспозициялар ойоштороуҙы, мемориаль таҡтаташтар ҡуйыуҙы индерергә кәрәк, тигән кәңәш бирә.

✓2018 йылда урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү программаһына республика ҡаҙнаһынан 400 миллион һум самаһы аҡса йүнәлтергә ниәтләйҙәр, тип хәбәр итә Башҡортостандың Финанс министрлығы. 2017 йылда ошо программаны тормошҡа ашырыу өсөн 300 миллион һум бүленгәйне. 436 проект еңеүсе тип танылды, финанслауҙың дөйөм суммаһы, республика һәм муниципаль бюджеттарҙы, шулай уҡ халыҡтың вкладтарын һәм спонсорҙар ярҙамын иҫәпкә алып, 445,4 миллион һум тәшкил итте.

✓Сибай ҡалаһы башлығы вазифаһына биш кеше дәғүә итә. "Башҡортостан Республикаһының муниципаль берәмектәр Советы" ассоциацияһының эксперт комиссияһы ағзалары дәғүәселәрҙең килешеү буйынса ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын биләүгә белем кимәлен баһаланы. Улар өс дәғүәсенең: Илһам Әбделғужиндың, Рөстәм Афзаловтың һәм Азат Камбулатовтың "белем кимәле тап килә" тигән баһа сығарҙы.

✓Башҡортостан мөфтөйө Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин "Күрһәткән хеҙмәте өсөн" мосолман орденына лайыҡ булды. Бүләкләү тантанаһы Өфөлә "Фәхретдинов уҡыуҙары" IV Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы сиктәрендә үтте. Ислам форумы Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының 100 йыллығына арналды.

**“Башинформ”дан**.

БАШ ҠАЛАМ

# ТЫМЫҠ...
## әммә мөһабәт ул

**Өфө - миллионлы ҡала. Башҡа ҙур мегаполистарға хас һыҙаттары менән бер рәттән, уның да үҙенә генә хас үҙенсәлектәре, иҫтәлекле урындары бар. Нәҡ ошо айырмалыҡтары менән ул беҙҙең күңелгә яҡын һәм ҡәҙерле. Өфөлә әллә күпме йәшәһәң дә, уны әленән-әле яңынан асаһың, хатта күптән таныш урындар ҙа йыл миҙгеленә, һауа шарттарына, күңел торошона ҡарап төрлө яҡтан күренә.**

Һәр кемдең ҡалала үҙенең яратҡан урыны булалыр, тип уйлайым. Мин, мәҫәлән, Өфө амфитеатрын үҙ итәм. Башҡа бер ҡайҙа ла булмаған, ҡабатланмаған был урын кешегә күңеле менән ял итеү өсөн тәбиғәттең үҙе тарафынан эшләнгән кеүек. Бында хатта тынлыҡ та үҙенә бер төрлө "яңғырай". Амфитеатрҙа уҙған фестиваль, концерт, башҡа мәҙәни-спорт саралары Өфө халҡын ғына түгел, ә ҡала ҡунаҡтарын да бер ергә туплай. Ә халҡымдың моңло ҡурайын хәтерләтеп теҙелеп ултырған тирмәләр иһә байрамдарға гармония өҫтәй, уларҙы тулыландыра. Ләкин тирмәләр күберәк сауҙа итеү ролен үтәй. Миңә ҡалһа, уларҙың һәр береһендә ерле халыҡтың йәшәйешен, тарихын сағылдырған мотиватарҙың булыуы мотлаҡ. Аш-һыу тәҡдим ителгән тирмәлә лә башҡорт аҙыҡтарын һатыу үҙен аҡлар ине. Салауат Юлаев һәйкәле торған майҙандан амфитеатрға төшөү өсөн матур баҫҡыстар күп, ләкин коляска менән был юлды үтеп булмай. Шулай уҡ Яңы йыл шыршыһын аҫҡа күсереү һәм шунда уҡ боҙ майҙансығы эшләү ҙә күптәрҙең юлын "япты". Коляска йәки сана менән аҫҡа төшөү өсөн Конгресс-холды урап, бер кеше генә һыйырлыҡ тар тротуарға барып етергә кәрәк. Машиналар геүләп торған был урында ҡаршы осрашҡандар оло юлға төшөп, ғүмерҙәрен хәүеф аҫтына ҡуя.

Өфөнө ҙур ауыл, тиҙәр. Ләкин был һүҙҙәрҙә бер ниндәй ҙә кәмһетеү юҡ. Баш ҡалабыҙ һәр кемгә ауылда ғына була торған йылылыҡ, берҙәмлек тойғоһо бирә. Бында һәр кем үҙен тыуған йортондағы кеүек хис итә, сөнки дуҫтары, туғандары күпләп ошо ҡалала ғүмер итә. Өфө - тымыҡ, шул уҡ ваҡытта мөһабәт ҡала.

Баш ҡала үҙенең оҙонлоҡҡа һуҙылған булыуы менән хайран итә. Дим биҫтәһенән ҡаланың икенсе осона барып килгәнсе үҙеңде тотош бер сәйәхәттә йөрөп ҡайтҡандай хис итәһең. Ошондай "сәйәхәт" ваҡытында, транспорт тәҙрәһе аша, ҡалала алып барылған төҙөкләндереүҙең ни тиклем әүҙем икәнлеген күрергә була. Шулай уҡ йылдың ниндәй миҙгелендә лә Өфөлә урам һепереүселәрҙең күплеге күҙгә ташлана. Тимәк, таҙалыҡҡа, йәшелләндереүгә күп иғтибар бүленә. Әлбиттә, яҙын-көҙөн, башҡа ҙур ҡалаларҙағы кеүек үк, бысраҡты, күләүекте йырып сыҡҡыһыҙ урындар етерлек, ләкин етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса күп эшләнә. Һәм был хупларға лайыҡ.

Төнгө Өфөнө яратам. Матур булып уттары янып торған урамдар, төрлө төҫтәр менән яҡтыртылған биналар, нурға ҡойоноп "йырлап" тороусы фонтандар - барыһы ла ҡалаға күркәмлек өҫтәй. Хатта фонтан янында йырбейеү менән аҡса эшләргә тырышыусы йәштәр ҙә күңелемә яҡын. Уларҙың тырышлығы, үҙҙәрен ышаныслы һәм иркен тотоуы миңә оҡшай.

Барыбыҙ ҙа яратҡан Өфөбөҙгә артабан да үҫергә, нығынырға, ҡеүәтен артабан арттырырға ғына яҙһын.

**Вәсил СӨЛӘЙМӘНОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҢ ТӘҮҘӘ МӘКТӘП ТӨҘӨ!



**Өфөнөң Октябрь районы Нуғай ауылында мәктәп асыу тантанаһы уҙҙы. Унда Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов, мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты.**

Урындағы уҡыусылар был ваҡиғаны ике йыл көттө. 1250 урынға иҫәпләнгән социаль объект төҙөлөшө республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың шәхси контролендә булды. Нуғай биҫтәһендәге яңы мәктәп ике уҡыу һәм бер спорт блогынан тора. Бина бөтә заманса талаптарға яуап бирә. Бында информатика кабинеттары, интерактив комплекс, 504 урынлыҡ тамашалар залы, процедура, прививка яһау һәм стоматология бүлмәләре менән медицина блогы, 402 урынлыҡ ашхана бар. Был - һуңғы өс айҙа Өфөлә асылған өсөнсө мәктәп. Баш ҡаланың Дим районында һәм Колгуев биҫтәһендә лә белем биреү учреждениелары төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылыуы тураһында хәбәр иткәйнек инде.

Төбәк етәксеһе билдәләүенсә, әлегә тиклем Нуғай, шулай уҡ эргә-тирәлә урынлашҡан Жилино һәм Зинино тораҡ пункттарынан уҡыусылар 1970 йылда төҙөлгән бинала уҡырға мәжбүр ине. 200 кешегә иҫәпләнгән мәктәпкә 700 уҡыусы йөрөнө, улар ике сменала уҡыны. Бинаның заманса талаптарға тап килмәүен иҫәпкә алып, 2015 йылда 1250 урынлыҡ яңы мәктәп төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Әле объекттың 300 урынға иҫәпләнгән тәүге сираты файҙаланыуға тапшырылды. Оҙаҡламай икенсе сираты төҙөлә башлаясаҡ.

- Биҫтә буйынса хәл ителмәгән бер төркөм һорауҙар бар. Мәктәп кенә түгел. Балалар баҡсалары, тимер юл аша сыға торған юл кәрәк. Миндә ата-әсәләрҙән, ауылда йәшәүселәрҙән уны хәҙер үк төҙөй башларға һорап яҙған хаттар байтаҡ. Әлегә проект та юҡ, уй-фекерҙәр генә бар. Был да властың ошо йәһәттән һуңлап эшләүе тураһында һөйләй. Иң тәүҙә ҙур йорттар һалып, социаль объекттар төҙөүҙә һуңға ҡалдырыу күренештәрен, һис шикһеҙ, туҡтатырға кәрәк. Иң тәүҙә мәктәптәр, дауаханалар, поликлиникалар төҙөү фарыз. Быны Нуғай биҫтәһен дә үҫтереү һәм уны алға ебәреү йәһәтенән үҙгәрештәр индерергә тейешбеҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов.

# УМАРТАСЫЛАРҒА ЭШ КҮП

**Республикала 2021 йылда "Апимондия" Бөтә донъя умартасылар конгресын уҙғарыу уңайынан "Баллы ауыл" проекты әҙерләнә. Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған йыйылышта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ошо хаҡта һөйләне.**

- "Апимондия" конгресына бағышланған "Баллы ауыл" проекты концепцияһы республика умартасылығы тарихы, уның йолалары һәм бөгөнгө тәжрибәһе тураһында мәғлүмәт майҙансығы рәүешендә буласаҡ. - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Бөгөн фойелағы күргәҙмәлә умартасыларыбыҙҙың үҙенсәлекле, ҡыҙыҡлы продукцияһын күрәбеҙ. Ошо эшмәкәрлектә, шул иҫәптән ризыҡты сертификациялау йәһәтенән дә, дөрөҫ ойоштороргә ғына кәрәк. Беҙ лабораторияһатып алдыҡ, уның хаҡы - бер нисә тиҫтә миллион һум. Хәҙер фәнни һәм практик өлкәлә халыҡ-ара хеҙмәттәшлектең яңы кимәленә сығырға, башҡа илдәрҙең баҙарында ризыҡтарыбыҙҙы кинерәк күрһәтергә кәрәк. Башҡорт балынан тыш, прополисты, кәрәҙле балды, һитәне, сәскә һеркәһен, инә ҡорт һөтөн. Әле ошо продукцияны эске баҙар өсөн дә аҙ етештерәбеҙ. Шуға күрә умартасыларыбыҙға башҡараһы эштәр етерлек.

Ошо уҡ йыйылышта Рөстәм Хәмитов киләһе йылда республиканың Федоровка, Бишбүләк һәм Ейәнсура районында Cremonini Италия компанияһы менән берлектә 3-әр мең мал һыйышлы һимертеү майҙансыҡтары төҙөү буйынса инвестиция проектын тормошҡа ашыра башлау тураһында һөйләне.

# ПОЧЕТЛЫ ГРАЖДАНДАР САФЫ АРТТЫ

**Өфө ҡала Советының сираттағы сессияһы, гәҙиттәгенән айырмалы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Татарстандың Ғабдулла Туҡай исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, СССР Композиторҙар союзы ағзаһы, композитор Рим Хәсәновка "Өфө ҡалаһының почетлы гражданы" тигән маҡтаулы исем биреүҙән башланды.**

Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов билдәләүенсә, Рим Мәхмүт улы һуңғы 8 йыл эсендә быңдай исемгә лайыҡ булған икенсе кеше. "Ғөмүмән, ҡаланың почетлы гражданы исеменә баш ҡалала тыуған һәм уның абруйын арттырыуға үҙ өлөшөн индергән кешеләр лайыҡ булырға тейеш тип иҫәпләйем, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Башҡортостанда тыуып, баш ҡала тарихында ҙур роль уйнаусы кешеләр ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Рим Хәсәновтың Өфө тураһында тиҫтәгә яҡын йыры бар һәм улар күптән инде хитҡа әйләнгән. "Өфө йүкәләре"н нисәмә быуын йырлай".

Тантаналы өлөштән һуң йыйылыусылар ҡала өсөн мөһим булған мәсьәләләрҙе ҡараны. Улар араһында урамдарға, скверҙарға, майҙандарға, башҡа адресլы урындарға иң яҡшы исем биреү буйынса конкурс положениеһы ла раҫланды. Конкурста муниципаль хеҙмәткәрҙәрҙән башҡа теләгән кеше ҡатнаша ала. Быны өсөн ҡала Советының рәсми сайтындағы ғаризаны тултырырға кәрәк. Конкурс 16 ноябрҙән 6 декабргә тиклем барасаҡ. Шулай уҡ Киров һәм Совет районындағы ике урам ошо ултырышта исемле булды: бер урамға 1962-1987 йылдарҙа Башҡортостан Эске эштәр министрлығын етәкләгән генерал-лейтенант Владимир Рыленко, икенсе урамға Советтар Союзы Геройы, подполковник Вениамин Недошивин исеме бирелеүе раҫланды.

Депутаттар ҡала Советының "Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡала округының бюджеты тураһында" проект ҡарары буйынса асыҡ тыңлауҙар үткәреү өсөн дә тауыш бирҙе. Был сара 30 ноябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында (Октябрь проспекты, 137, 16.00 сәғәт) уҙғарыласаҡ.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Һуңғы алты уйында бишенсе тапҡыр еңелеү - әлеге мәлгә "Салауат Юлаев"тың эш һөҙөмтәһе шундай. 15 ноябрҙә Мәскәү боҙонда Өфөнөң боҙ дружинаһы ЦСКА-нан 3:0 иҫәбе менән еңелде. Йәй көнө "юлаевсылар" менән ике йыллыҡ килешеү төҙөгән фин белгесенең отставкаһы хаҡында хәбәрҙәр йышыраҡ яңғырай башланы. "Салауат Юлаев"тың генераль менеджеры Леонид Вайсфельд әлегә Эркка Вестерлундты вазифаһынан бушатыу тураһында мәғлүмәтте раҫламай.

✔Башҡортостанда 85 берәмек техника федераль трассаларҙы таҙартырға сыҡты. "Приуралье" юл идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, юл ойошмалары М-5 Урал, М-7 Волга һәм Р-240 Өфө - Ырымбур федераль юлдары буйлап йөрөүҙе тәьмин итеү өсөн юғары әҙерлек режимына күсерелгән. Хәл тәүлек әйләнәһенә 46 метеовидеофиксация постары ярҙамында контролдә тотола. Ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуған осраҡта 8 (347) 228-12-18 телефоны буйынса диспетчер хеҙмәтенә мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✔17 ноябрҙә "Урал легендаһы" Өфө - Белорет поезды йөрөй башлай. Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһынан хәбәр итеүҙәренсә, махсус электричка аҙнаһына өс тапҡыр - йома, шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә юлға сыға. Билет 600 һум тора, пассажирҙарҙы тау саңғыһы базаһына тиклем автобуста алып барыу ҙа ошо хаҡҡа инә. Төбәктә льготаға эйә булғандарға һәм уҡыусыларға 50 процентлыҡ ташлама ҡаралған.

✔Өфөләге яғыулыҡ-ҡойоу станцияларында дизель яғыулығы йәнә ҡиммәтләнде, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. 13 ноябргә һәйләнмә аҙналыҡ мониторинг мәғлүмәттәренә ярашлы, дизель яғыулығының бер литры уртаса 39,34 һум тора. Шуның менән бергә бензинға хаҡтар әлегә үҙгәрешһеҙ ҡала. Мәҫәлән, А-76 (АИ-80) маркалы бензиндың бер литры хәҙер уртаса 34,30 һум, АИ-92 - 36,17, АИ-95 һәм юғарырағы - 39,34 һум.

✔Башҡорт дәүләт аграр университетында "Ауыл хужалығы машиналарын файҙаланыу" компетенцияһы буйынса WorldSkills Russia тармаҡ чемпионаты асылды. Ул 19 ноябргә тиклем дауам итә. Чемпионаттың маҡсаты - эшсе һөнәрҙәрҙең абруйын арттырыу һәм профессиональ белем биреүҙе үҫтереү, компетенцияларҙың иҡтисади үҫеш һәм шәхси уңыш өсөн мөһим икәнлеген күрһәтеү.

***✓ Халыҡ иҫәбен алыу барышында халыҡ һаны һәм составы тураһында рәсми мәғлүмәт йыйыу күҙаллана. Шулай уҡ халыҡтың белем кимәле, милли һәм тел составы, социаль-иҡтисади характеристика иҫәпкә алына.***



*ҠЫҪҠАСА*

# ӘРМЕГӘ КИТӘ ЕГЕТТӘР...

✓ Ҡала округы хакимиәте ҡарары менән 1990 - 1999 йылдарҙа тыуыусыларҙы хәрби хеҙмәткә саҡырыу буйынса эш алып барыла. Бында төп бурыстарҙың береһе - саҡырыу тураһында ваҡытында һәм һәр кемгә хәбәр итеү. Әлеге ваҡытҡа барлығы 6026 кешегә мәғлүмәт бирелгән. Үкенескә күрә, күптәрҙең теркәлеү урыны буйынса йәшәмәүе сәбәпле, граждандарҙы иҫкәртеү буйынса ауырлыҡтар бар. Мәҫәлән, Октябрь һәм Совет райондарынан 120 граждандың военкоматҡа килеүен тәьмин итеү өсөн хәрби комиссариаттар Өфө ҡалаһының йәмәғәт именлеге үҙәге ярҙамын файҙаланырға мәжбүр була. Ойошторолған саралар һөҙөмтәһендә 38 кешегә повестка тапшырыла, 9 адрес буйынса повестканы алып ҡалыуҙан баш тарталар, 23 осраҡта бөтөнләй ишек асмайҙар, 44 саҡырылыусы теркәлгән адрес буйынса йәшәмәй, бәғзеләре Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығында хеҙмәттә. 13 ноябргә ҡарата Өфөнән саҡырыу комиссияларына барлығы - 3537 кеше, шуларҙың 731-е хәрби хеҙмәткә саҡырылған. Дөйөм алғанда, быйыл яҙғы-көҙгө саҡырылышта Өфөнән 922 егет армияға саҡырылған. Волга буйы федераль округының башҡа ҡалалары менән сағыштырғанда, был - иң юғары күрһәткес.

✓ Башҡортостанда төбәк "Роспотребнадзор" идаралығы белгестәре контрафактлы алкоголь менән сауҙа итеүсе 136 сайтты бикләүгә өлгәште. Ведомствола аңлатыуҙарынса, исемлеккә сайттар ғына түгел, социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәләр ҙә ингән. Былтыр суд органдары Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау идаралығының 96 ғаризаһын, 2017 йылдың туғыҙ айында 40 ғаризаһын ҡәнәғәтләндергән. Бындай сайттарҙағы мәғлүмәт алкоголле продукцияны һатыу буйынса билдәләнгән талаптарҙы боҙоп, билдәһеҙ кешеләрҙең сифатһыҙ продукцияны ("элиталы алкоголь алмаштарын") һатыуға йүнәлтелгән. Медицина хеҙмәткәрҙәре ғүмерҙе һәм һаулыҡты һаҡлап ҡалыу маҡсатында алкоголле продукцияны лицензияһы булған сауҙа ойошмаларынан ғына алырға кәрәк, тип иҫкәртә.

✓ Махсус хеҙмәттәр ҡала урамдарынан йылына 5 меңгә яҡын берәҙәк бесәй һәм эт аулай. Бер нисә йыл элек был һан 15 меңгә етә ине. Аулаған саҡта хайуандарға зыян килмәй, иммобилизация заманса ветеринар препараттар ҡулланып яһала. Ветеринар табип ҡарағандан һуң, сәләмәт тип табылған хайуандар берәҙәк хайуандарға яңы хужалар эҙләү менән шөғөлләнгән йәмәғәт ойошмаларына тапшырыла. Бөгөнгө көндә Өфөлә ошондай хайуандар өсөн приют төҙөү проблемаһы бар. Был приюттың проекты эшләнгән, уның буйынса унда 500 эт һәм 200 бесәй йәшәйәсәк. Приютта ваҡытлыса һәм даими йәшәгән хайуандар буласаҡ. Әлеге мәлдә проект дәүләт экспертизаһы үтә. Ыңғай яуап алғандан һуң, проект төҙөү-монтажлау эштәрен башҡарыу өсөн сауҙа идаралығына ҡуйыласаҡ.

✓ "Өфө" аэропортынан Ҡытайға рейс асыла. Хайнань утрауына аҙна һайын "Икар" авиакомпанияһы самолеттары осасаҡ, тип хәбәр итә баш ҡала авиаүҙәгенең матбуғат хеҙмәте. Рейстар 2017 йылдың 23 декабренән 2018 йылдың 24 мартына ҡәҙәр башҡарыла. Өфө - Хайкоу маршруты буйынса самолет аҙна һайын шәмбе төнгө 12 тула 15 минуттан күтәреләсәк. Авиапассажирҙар ун сәғәт самаһы ваҡытты күктә уҙғарасаҡ. Ташыусы маршрутта 340 кешегә иҫәпләнгән Boeing 767-300 самолетын файҙаланырға ниәтләй. Әйткәндәй, 2 ноябрҙән республиканың баш ҡалаһынан Ҡытайға, Хайнань утрауына тура рейс асылғайны.

✓ Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы намыҫһыҙ ата-әсәләр, уллыҡҡа һәм ҡарауға алыусылар берҙәм реестрын эшләү буйынса закон проектын әҙерләгән. Тейешле документ федераль норматив-хоҡуҡи акттар проекттары порталында урынлашҡан, тип хәбәр итә "Известия" гәзите. Рәсәй Федерацияһының Ғаилә кодексына ярашлы, ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгән йәки ата-әсә хоҡуғынан сикләнгән, ҡарауға алыусы бурысынан бушатылған граждандар уллыҡҡа бала ала йәки йәнә опекун булып тәғәйенләнә алмай, әммә компетентлы органдар араһында үҙ-ара мәғлүмәт менән алмашыу тәртибе булмағанға күрә, ундай осраҡтар килеп тыуҙы. "Закон проекты тарафынан тәҡдим ителгән үҙгәрештәр балаларҙы уларҙың уҡ мәнфәғәтендә намыҫһыҙ ата-әсәләр, уллыҡҡа алыусылар, опекундар, бағыусылар ғаиләләренә тәрбиәгә бирмәүҙе тәьмин итәсәк", - тиелә закон проектындағы аңлатма хатында.

✓ Сираттағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 2020 йылдың 1-31 октябрендә уҙғарыла. Рәсәй Хөкүмәте ошо хаҡта бойороҡ ҡабул итте. Документта әйтелеүенсә, ойоштороу мәсьәләләрен эшкәртеү маҡсатында 2018 йылдың 1-31 октябрендә дөйөм халыҡ иҫәбен алыу ойошторола һәм 550 мең кешене үҙ эсенә ала. Халыҡ иҫәбен алыу барышында Рәсәй, ил төбәктәре, муниципаль берәмектәр халҡының һаны һәм составы тураһында рәсми мәғлүмәт йыйыу күҙаллана. Шулай уҡ халыҡтың белем кимәле, милли һәм тел составы, социаль-иҡтисади характеристика иҫәпкә алына. Бынан алдағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 2010 йылдың октябрендә үткәрелде. Унда 141 миллиондан ашыу кеше ҡатнашты.

✓ Башҡортостан биләмәһендә махсуслаштырылған саралар уҙа, уның сиктәрендә ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре автомобилдәрҙә билдәләнгән талаптарға яуап бирмәгән уҡылмаҫлыҡ дәүләт номерҙарына айырыуса иғтибар бүлә. Төбәк Дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, автомобиль хужалары тәртип боҙоуҙарҙы төшөргән фото һәм видеотеркәү камераларын алдарға маташып, юрамал дәүләт номерҙарын буяп ҡуя йәки айырым хәрефтәрен, һандарын икенселәй үҙгәртеп буяй. Ҡайһы берҙә водителдәр номерға тулыһынса пленка йәбештерә йәки дәүләт номерының өҫтөнә яңы һандар төшөрә. "Улар дөйөм билдәләнгән ҡағиҙәләрҙе боҙоп ҡына ҡалмай, әммә эшләгән ҡылыҡтары өсөн дә яуап бирергә теләмәй. Шундай ысул менән улар тиҙлек режимын боҙған өсөн яуаплылыҡтан ҡасырға теләй", - тип билдәләнеләр ведомствола. Дәүләт автоинспекцияһы махсус рәүештә бындай тәртип боҙоусыларҙы асыҡлай.

✓ Баш ҡалала ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыу һәм сығарыу системаһы тотороҡло эшләй. Был өлкәлә иң эре һәм тәжрибәле оператор булып "Ҡаланы таҙартыу махсус автохужалығы" муниципаль предприятиеһы тора. Күп фатирлы йорттарҙың ихатаһында яңы контейнер майҙандары урынлаштырыла, иҫке контейнерҙар яңыларға - пластиктарға алмаштырыла. Әлеге ваҡытта күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәрҙең 98 проценты коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр иҫәбендә ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары сығарыу өсөн дә түләй. Шәхси секторҙа йәшәүселәрҙең 30 проценты ғына был хеҙмәттән файҙалана.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*



# ТЫНЫСЛЫҠҠА...

## тағы бер аҙым

**Вьетнамда "Азия - Тымыҡ океан иҡтисади хеҙмәттәшлек" форумы сиктәрендә Рәсәй һәм Америка президенттары осрашып, Сириялағы ваҡиғаларҙы тулыһынса көйләүҙең юлдарын барланы һәм уларҙы тормошҡа ашырыуҙағы берҙәм хеҙмәттәшлек итеү саралары хаҡында әңгәмәләште.**

Рәсәй һәм АҠШ етәкселәре Сирияла ИГИЛ-ды (Рәсәйҙә тыйылған) тулыһынса юҡҡа сығарыу тураһындағы ниәттең берҙәмлеген һәм ҡәтғилеген белдерҙе. Улар ике илдең хәрби көстәре араһында юғалтыуҙарҙы булдырмау маҡсатында ғәмәлдәге хәрби бәйләнеш каналдарын һаҡлап ҡалыу тураһында һүҙ беркетте. В. Путин һәм Д. Трамп Сирияла хәрби көстәр тупланған зоналарҙы әҙәйтеү, илгә гуманитар ярҙамдың тотҡарлыҡһыҙ килеп тороуын тәьмин итеү һәм конфликтты хәл итеү өсөн шарттар булдырыу илдәге көсөргәнешлекте кәметеү мөмкинлеге бирәсәк, тип белдерҙе. Шулай уҡ ИГИЛ-ды ҡыйратҡандан һуң, Сирия биләмәһендә бер илдең дә хәрби көстәре ҡалмаҫҡа тейеш, тип билдәләнде әлеге осрашыуҙа. Быларҙың барыһын да Сириялағы хәлдәрҙе яйлауға булышлыҡ итеүсе конструктив программа, тип ҡарарға мөмкин. Әйтергә кәрәк, әлеге программа рәсми Дамаскта ла яҡлау табасаҡ, сөнки уның йөкмәткеһендә Сирия хөкүмәте тарафынан яңғыраған шарттар ҙа урын алған.

Владимир Путин һәм Дональд Трамп Сирияла демократик һәм конституцион үҙгәрештәр булһын өсөн халыҡ-ара күҙәтеүселәр ҡатнашлығында иркен һайлауҙар үткәреүҙе яҡлап сығыш яһаны. Документта был һайлауҙарҙа кемдең ҡатнашыу мөмкинлеге булыуы йәки әлеге властың бөтөнләй алышынырға тейешлеге хаҡында бер ни ҙә әйтелмәгән. Шулай ҙа үҙ илендә Б.Асадты күптәрҙең яҡлауы һәм Сирияның бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыу шарттарында үҙгәрештәргә риза булыуы уның дәүләт башлығы булып ҡалыуына ҙур ышаныс бирә. Ә Рәсәй, Американан айырмалы рәүештә, гел ошо позицияны күҙ уңында тотто. Хәҙер иһә Вашингтондың да был фекерҙе ҡабул итергә әҙер булыуы бынан алдағы ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы әҙ булһа ла шымартыр, тигән өмөт уята. Ғөмүмән, әлеге осрашыуҙы, тулы булмаған форматта уҙһа ла, Сирияла тыныслыҡ урынлаштырыуҙың ныҡлы нигеҙен булдыра алыусы сара, тип һанарға мөмкин. Быға тиклем Сирияға ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса ҡапма-ҡаршы позицияла булған ике ил араһында, ниһайәт, ниндәйҙер яҡтылыҡ күренде. Дональд Трамптың әлеге осрашыуҙың һөҙөмтәһен "был килешеү бик күп ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк", тип белдереүе ҙур әһәмиәткә эйә. Хәҙер иһә әйтелгән һүҙҙәрҙән анығ эштәргә генә күсәһе ҡалды.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үксә ярылыуынан

❖ Бал - антисептик, ул яра йүнәлтеү сифаттарына эйә. Йоҡларға ятыр алдынан үксәләргә бал һөртөргә, целлофан менән ҡапларға. Иртән аяҡтарҙы йыуып, вазелин һөртөргә. 4-5 көндән яҡшырыу тойорһоғоҙ.

❖ Аҡ майға шул уҡ күләмдә бал ҡушып, төнгөлөккә үксәләргә һөртөргә.

❖ 15 мл үҫемлек майына (кукуруз, зәйтүн, виноград һөйәктәре, миндаль, ҡабаҡ, көнбағыш майы) 1 йомортҡа һарыһы, 5 мл 9 процентлы аш һеркәһе ҡушырға. Шулай уҡ төнгөлөккә һөртөргә.

❖ 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 12 минут төнәтергә, аяҡ ваннаһына ҡулланырға. Үксә ярылыуынан, механик яраларҙан файҙалы.

❖ 1 литр йылы һыуға 1 ҡалаҡ сода һалып болғарға ла, мамыҡты ошо һыуға манып, үксәгә бәйләргә.

### Аҡ шыршы майы

❖ Халыҡ медицинаһында аҡ шыршы майы ла ҡулланыла. Ангина ваҡытында миндалиналарға мамыҡ тампон ярҙамында аҡ шыршы майы һөртөргә. 4-6 сәғәттән һуң тағы ҡабатларға. Быны көнөнә 2-5 тапҡыр эшләргә. Хроник ангина мәлендә танауға 1-2 тамсы май тамыҙырға ла була.

❖ Үпкә көпшәләре шешкәндә эмаль һауытта һыу ҡайнатып, уға 3-4 тамсы май тамыҙырға һәм ошо быу менән һуларға. Ингаляциянан һуң, түште май менән ыуалар һәм юрған ябынып ятып торалар.

❖ Киҙеү, ОРЗ, һалҡын тейгәндә арҡаға, түшкә, муйынға май менән массаж эшләйҙәр. 5-6 сәғәттән һуң тағы ҡабатлайҙар. Массаждан һуң ауырыуға тир ҡыуыусы үләндәрҙән яһалған сәй эсереп, урап һалалар.

### Быуындар һыҙлағанда

❖ Был шифалы майҙы артрит, артроз, шулай уҡ быуындар һыҙлағанда, арҡала ауыртыу барлыҡҡа килгәндә һөртөргә. 300 мл медицина һәм 10 мл камфара спирты, 10 төймә анальгин дарыуы, 10 мл йодты яҡшылап болғатырға ла 21 көн ҡараңғы урында тоторға. Ҡулланыр алдынан болғатырға.

✓ ***Был 1856 йылда Миңлеямал инәйҙең өләсәһе тарафынан кәзә ҡылынан һуғып, уҫаҡ ҡайырыһынан яһалған буяуҙарға буялған балаҫ ине. Ауыл ҡатындарының юҡтан бар яһай ала белеүҙәренә һоҡланып та ҡараным мин балаҫҡа.***



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Монафиҡтарҙың аҫтыртын эше

Әйтергә кәрәк, ансарҙарға мөһәжирҙәрҙең хәлен аңлау еңел булмай. Сөнки улар Ислам тәғлимәтенә икенсерәк төрлө юл менән килә. Ислам динен улар тотош ара йәки нәҫел менән ҡабул итә, шуға ла, мөһәжирҙәрҙән айырмалы рәүештә, туғандары менән дошманлашырға тура килмәй уларға.

Мәҙинәнең бай һәм абруйлы шейхтары ла Ислам динен ҡабул итә. Улары инде яңы тәғлимәтте үҙ сәйәсәтенә яраҡлаштырырға тырыша. Ислам тәғлимәтен үҙ мәнфәғәтендә файҙаланып, бөтөн Мәҙинәне үҙҙәренә буйһондорорға ынтылалар. Улар менән Абдаллаһ ибн Ғөбәй етәкселек итә. Мөхәммәт бәйғәмбәр уларҙы "монафиҡ" ("ике йөҙлөләр") тип атай.

Шул уҡ ваҡытта Мәҙинә халҡының ҡайһы бер нәҫелдәре, шулай уҡ айырым кешеләре Ислам тәғлимәтен ҡабул итергә ашыҡмай. Ләкин ундайҙар берләшкән сәйәси көс булдыра алмай. Булдырырға тырышмай ҙа, шуға ла улар яғынан мосолмандарға зыян теймәй. Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә уларға артыҡ иғтибар итмәй, әл-Манат тип аталған ғибәҙәтханаларына ла теймәй.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе монафиҡтар нығыраҡ борсой. Улар, Ислам тәғлимәтен байраҡ итеп алып, ысын мосолмандарға ҡаршы аҫтыртын көрәш алып бара. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең дошмандары, шул иҫәптән, ҡөрәйш мәжүсиҙәре менән дә һөйләшеү алып барырға теләүҙәре тураһындағы хәүефле хәбәрҙәр әленән-әле ишетелеп тора.

Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙен тыныс тотһа ла, монафиҡтарҙың сәйәсәтенә йәндәре көйгән өммәттәштәре хис-тойғоларын артыҡ йәшермәй, монафиҡтарҙы тотоп туҡмаған осраҡтар ҙа булғылай. Бер нисә тапҡыр монафиҡтарҙы мәсеттән сығарып ырғытҡандан һуң улар үҙҙәренә әл-Дирар исемле айырым мәсет төҙөп ҡуя.

Йәһүд һәм христиан динен тотоусылар менән дә мөнәсәбәттәр ҡатмарлы була. Улары һуғышмай, әммә оҫта бәхәсләшә. Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә яуапһыҙ ҡалмай, улар инанған тәғлимәттәрҙең етешһеҙлеген асып бирә. Бынан тыш, ул үҙ өммәтенә Иерусалимға түгел, ә Мәккәләге Ҡәғбә яғына ҡарап доға ҡылырға ҡуша. Ҡибланың элекке яғына ҡайтарылыуына мосолмандар барыһы ла сикһеҙ ҡыуана, сөнки боронғо бәйғәмбәрҙәр төҙөгән Ҡәғбәне бөтөн ғәрәп халҡы ярата, ихтирам итә һәм иң изге урын һанай.

## Мәжүсиҙәргә ҡаршы һуғыш

623 йылдың март айында баһадир Хәмзә етәкселегендә утыҙлаған мосолман каруан юлына сыға. Ошо ваҡыт ҡөрәйш ырыуының ҙур каруаны үтеп китергә тейеш була. Ләкин Хәмзә каруан урынына Әбү Джәхел етәкселек иткән ике йөҙләгән ҡөрәйш яугирҙарын осрата. Ике ғәскәр бер-береһенә ҡаршы тора, яуға әҙерләнә, тик һуғышып өлгөрмәй. Сөнки Джөхәйен ырыуы кешеләре килеп етә лә - ә был ваҡиға уларҙың ерҙәрендә бара - һуғышырға форсат бирмәй. Джөхәйен ырыуының Мәҙинә менән дә, Мәккә менән дә мөнәсәбәттәре һәйбәт була, һәм уларҙың береһе менән дә араларын боҙорға теләмәйҙәр. Шулай итеп, мосолмандар менән ҡөрәйш мәжүсиҙәре араһындағы тәүге ҡораллы осрашыу һуғышһыҙ тамамлана.

**(Дауамы бар).**

*ӨЛӘСӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ*

# МИҢЛЕЯМАЛ ИНӘЙ ҺАНДЫҒЫ...

## әллә күпме серҙәр һаҡлай

**Серле һандыҡ, тиһәләр, күҙ алдына өләсәйҙең өйөндә иң түрҙән урын алған, йоҙаҡ эленгән, иҫтәлектәргә бай, сер һаҡлаусы семәрле һандыҡ килә. Ундағы һәр бер әйбер ҡәҙерләп бәпләп-тәҫләп һалына һәм мотлаҡ ниндәйҙер фәһемле ваҡиға менән бәйле була. Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында йәшәгән Балхина Миңлеямал инәйҙең һандығы иҫ киткес семәрле лә түгел, әммә үҙенең эсенә күп кенә серҙәр һыйҙырған. Был серле һандыҡтың төбөнә төшөп сыҡҡас, тәьҫораттарым менән уртаҡлашмай булдыра алманым.**







1938 йылда Буранбай ауылында Әхмәҙулла һәм Яңылбикә Хәмитовтар ғаиләһендә ун бер малайҙан һуң ун икенсе бала булып тыуа ул. Көтөп алынған ҡыҙ балаға Миңлеямал исеме һайланған. Үҫеп буй еткергән Миңлеямал 1956 йылда Сыңғыҙ ауылының сеүелдәктәр араһынан Балхин Ғиниәт атлы егеткә кейәүгә сыға. Атаһы бер бөртөк кенә ҡыҙына йәшел төҫкә буяп, ябай ғына йәтеш бирнә һандығы эшләп бирә. Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына күренһә лә, был һандыҡтың эсенә быуаттан ашыу ғүмер арауығын үҙ эсенә алған ғәжәйеп серҙәр һыйған.

Иң тәүҙә һандыҡ эсенән боронғо, биш билле, уҡалы камзул килеп сыҡты. Был камзулды Шырмай (Ғәҙелбай) ауылынан Рысбаева Аһылбикә инәй тегеп биргән икән. Камзулдың уҡаһын ағас көлө менән менән ышҡыһаң, ап-аҡ булып ялтырап китә, тип аптыратып та алды Миңлеямал инәй. Камзул артынса, 1984 йылда күк бәрхәттән тегелгән кәзәкей күренде. Кәзәкейҙең оҫтаһы - Түләкова Гөлйөҙөм инәй булып сыҡты (Рәйес Түләктең өләсәһе).

Кәзәкейҙән һуң иҫкереп, туҙып бөткән күлдәк күренде. Был күлдәктең нимәһен һаҡларға инде, тип уйлап та өлгөрмәнем, Миңлеямал инәй уны яҙып ебәрҙе: "Был минең Буранбай ауылында йәшәгән әсәйемдең иҙеүле күлдәге, ул һәр ваҡыт ошолайтып тектереп кейҙе күлдәкте. Әсәйем Хәмитова Яңылбикә Ғәлиәхмәт ҡыҙы 1892 йылғы. Күлдәктең дауарын (материалын, туҡымаһын) 1956 йылда ағайым Йәрмөхәмәтов Ҡотләхмәт Монголиянан алып ҡайтты. Ул шунда армияла булды. Бына, иҙеүенең уртаһында монгол аҡсаһы - тугрик. Тағы ла бында боронғо көмөш тәңкәләр тағылған", - тип һөйләп тә бирҙе.

Артабан инәй һандыҡ төбөнән сепрәк түшелдерек алып күрһәтте. Был түшелдеректе ҡорамаларҙан тегеп, күлдәктең эсенән кейгәндәр икән. Уның эске һәм тышҡы ҡатламдары араһында кеҫәһе лә бар. Был кеҫәгә аҡса, асҡыстар һалып йөрөтөргә мөмкин булған. Күлдәктең тышынан мәрйенле селтәр таҡҡандар.

Һандыҡ төбөнән сыҡҡан артабанғы сер мине тағы ла нығыраҡ аптыратты. Был 1856 йылда Миңлеямал инәйҙең өләсәһе Йәрмөхәмәтова Мөзәлифә тарафынан кәзә ҡылынан һуғып, уҫаҡ ҡайырыһынан яһалған буяуҙарға буялған балаҫ ине. Кәзә ҡылынан ошондай ҙа матур әйбер һуғып булыуын ауыл ҡыҙы булыуға ҡарамаҫтан, тәүгә ишетеүемә, күреүемә аптыраңҡырап та, ауыл ҡатындарының егәрлелегенә, юҡтан бар яһай ала белеүҙәренә һоҡланып та ҡараным мин балаҫҡа. Кәзә дебетенән бәйләнгән шәл, бейәләй-бирсәткәләрҙе яратып ҡулланабыҙ ҙа ул, илләмәгәр кәзә ҡылын да әрәм итмәгәндәрен тәүгә ишетеүҙән, асҡан ауыҙҙы ябырға онотоп, тағы бергилке ҡарап торҙом әле. Етмәһә, 160 йыл буйы туҙмай нисек һаҡланған һуң был балаҫ, тип тә аптырайым. Шулай, балаҫты әйләндереп-тулғандырып ҡарап торғанымда, Миңлеямал инәйем алдыма тағы ла бер йомшаҡ түшәк сығарып һалды. "Быныһы инде серге тыш була, - тине ул тантаналы рәүештә. - Ошо серге тышты 1956 йылда әсәйем эшләп бирҙе. Аҫтындағы кейеҙҙе лә үҙе баҫты, өҫтөндәге ҡорама тышлығын да ҡораны", - тип хәтер ебен һүтте ул. Миңлеямал инәйҙең өйөндә күпереп ятҡан яҫтыҡ тышлыҡтары ла 1956 йылда сигелгән булып сыҡты. Буяуҙары ла уңмаған, тышлыҡтары ла ап-аҡ.

Инде һандыҡтың сере бөткәндер тип кенә уйлап торғанымда, уның төбөнән һарғайып бөткән һалдат хаттары килеп сыҡмаһынмы! Фронттан Миңлеямал инәйҙең ағаһы Хәмитов Һаҙый Әхмәҙулла улының үҙ ҡулдары менән яҙған хаттары ине улар. Үҙенең иҫәнлеген белдереп, туғандарының, күршекүләндең хәл-әхүәлен һорашып яҙылған хаттарҙың ни тиклем ҡәҙерле ҡомартҡы буласағын һиҙемләп тә һаҡлағандарҙыр инде туғандары.

"Ағайым 1941 йылда һуғышҡа алынған ваҡытта ошоно эшләп, эсенә 3 ҡурай һалып киткән, - тип тағы ла ағастан эсен өңөп эшләнгән бер оҙонса әйбер сығарҙы инәй. Баҡтиһәң, был ҡурай ҡыны булып сыҡты. - Ошо ҡурай ҡынын ағайымдың иҫтәлеге итеп һаҡлайым. Ул оҫта ҡурайсы ине, шуға ла ҡурайҙарын ҡәҙерләп һаҡлағандыр инде. Эсендәге үлән ҡурайҙарын Раев Зәйнулла мәрхүм ҡурайсыға биреп ебәрҙем. Ә быныһы тағы ла бер ҡомартҡы- ағас туҫтаҡты ла һуғышҡа китеп юғалған ике туған ағайым Хәмитов (О)лоҡман яһаған ине",- тип, йәшел һандыҡтын барлыҡ серҙәрен дә сисеп бирҙе Миңлеямал инәй.

Бына ошо осрашыуҙан һуң мин борон өй түренең күрке булып, хәҙер инде солан төптәренә күсеп бөткән һандыҡтарҙың әллә күпме тарих һаҡлауына, уларҙағы хазинаның ни тиклем бай, ҡәҙерле һәм кәрәкле булыуына төшөндөм. Рәхмәт һеҙгә, серле һандыҡтар һәм шул һандыҡтың асҡыстары булған инәйҙәр!

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА.**
**Баймаҡ районы**
**Ярат ауылы.**

УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!

**Шәрифйән Әхмәтйән улы Манатов - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе, 1917 йылда милли хәрәкәттең идара органы - Башҡорт мәркәз шураһын етәкләгән ир-уҙаман. Уның етәкселегендә Мәркәз шура 1917 йылдың 15 ноябрендә (хәҙергесә 28 ноябрҙә) Башҡортостан автономияһын иғлан итә. Республика тарихында тәрән эҙ ҡалдырған был шәхес сығышы менән Ҡурған башҡорттарынан.**



# ШӘРИФ МАНАТОВ

Шәриф Манатов 1892 йылдың 20 октябрендә Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе (хәҙерге Ҡурған өлкәһенең Әлмән районы) Манат ауылында тыуған. Бөгөнгө көндә, үкенескә күрә, был ауыл бөткән.

Шәриф Манатов Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә, артабан Семипалатинск ҡалаһында Уҡытыусылар семинарияһында уҡый. 1910 йылда Санкт-Петербург ҡалаһындағы Бехтерев институтының тарих-филология факультетына уҡырға инә. Бында йәш егет сәйәси-революцион эшмәкәрлек менән мауығып китә. Һөҙөмтәлә, 1914 йылда полицияның эҙәрлекләүенән ҡасып, Швейцарияға сығып китә. Эмиграцияла революционерҙар менән аралаша, большевиктарҙың лидеры Ленин менән танышып ала.

1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң Башҡортостанға ҡайта. Өфөлә "Тормош" гәзите редакцияһында эшләй. 1917 йылдың йәйенән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Оҙаҡламай Ш. Манатов милли-хәрәкәт лидерҙарының береһенә әүерелә. 20-27 июлдә үткән I Башҡорт ҡоролтайында милли хәрәкәттең идара органы - Башҡорт мәркәз (үҙәк) шураһы башҡарма комитетына рәйес итеп һайлана. 1917 йылдың көҙөндә Шәриф Манатов Рәсәйҙең Ойоштороусылар йыйылышына (Учредительное Собрание) депутат итеп һайлана.

Уның етәкселегендәге Башҡорт мәркәз шураһы 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан итә. 8-20 декабрҙә Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһы раҫлана. Шәриф Манатов автономияның юғары закон сығарыу органы - Кесе ҡоролтайы составына һайлана. Үҙ сиратында, Кесе ҡоролтай үҙ составынан Башҡорт хөкүмәтен һайлай. Хөкүмәт рәйесен һайлаған ваҡытта ҡыҙыу көрәш башлана. "Был ҡоролтайҙа Арғаяш кантонлығы башҡорттарынан Ғәбделхай Ҡорбанғәлиев менән Минһаж исемле арҡадашы, монархист урыҫтар менән берләшеп, оппозиция тәшкил итергә маташты... Ҡорбанғәлиев Манатовты Башҡортостан хөкүмәте рәйесе итергә тырышты, беҙ иһә адвокат Юныс Бикбовты һайларға уйлай инек", - тип яҙа Вәлиди. Шулай итеп, күпселек тауыш менән Башҡорт хөкүмәте рәйесе итеп Ю. Бикбов һайлана.

Етәкселектән ситләтелеү сәбәпле, Шәриф Манатов 1918 йылдың ғинуарында Петроградҡа, Ойоштороу йыйылышына китә. Бында ул Милләттәр эштәре буйынса комиссариат (Наркомнац) янындағы Мосолман үҙәк комиссариатында эшләй башлай. Мосолман эштәре буйынса комиссар Мулланур Вәхитовтың урынбаҫары итеп раҫлана. Әммә мосолман комиссариаты алға һөргән Татар-Башҡорт республикаһы тураһындағы идея уның күңеленә хуш килмәй. Манатов башҡорт эшмәкәрҙәре Ф. Әхмәҙуллин, Т. Имаҡовтар (икеүһе Өфө мосолман комиссариатында эшләй) менән бергә айырым Башҡортостан автономияһы өсөн сығыш яһай башлай.

1918 йылдың майында Өфөгә килгән сағында Ш. Манатовты Мәскәүҙә бергә эшләгән коллегаһы, татар эсеры Ғәлимйән Ибраһимов ҡулға алып, Ф. Әхмәҙуллин һәм Т. Имаҡовтар менән бергә төрмәгә ябып ҡуя. Июнь айында, Өфө аҡтар ҡулына күсеү сәбәпле, Манатов Сарапул ҡалаһы төрмәһенә күсерелә. Төрмәлә ике ай тирәһе ултырып сыға.

Артабан Ш. Манатов РСФСР-ҙың Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариатында (Наркомнац РСФСР) эшләй. 1919 йылдың ғинуарында уны Төрөк коммунистар партияһының матбуғат баҫмаһын сығарыуҙа ярҙам күрһәтеү өсөн Төркиәгә ебәрәләр. Бында ул 1920 йылдың октябренә тиклем эшләй.

1920 йылдың декабренән Наркомнацтың БашЦИК янындағы вәкиле булып эшләй. 1924 йылдан Башҡортостан халыҡ мәғарифы янындағы Академик үҙәккә етәкселек итә. Артабан 1925-1932 йылдарҙа Ярославль педагогия институтында уҡыта, Әзербайжан компартияһы үҙәк комитетында эшләй, Баҡы педагогия институты ректоры булып китә.

1934 йылдан Фрунзе ҡалаһында Ҡырғыҙ дәүләт педагогия институтында уҡыта. 1935 йылда, "контрреволюцион буржуаз милләтсел идеологиянан" котолмаған кеше булараҡ, ул партия сафтарынан һәм эшенән сығарыла. Шунан һуң Шәриф Манатов Силәбе өлкәһенең Смородиновка ауылында йәшәгән ағаһы янына ҡайтып төшә. 1936 йылдың көҙөндә ошо ауылда вафат була. Уны күрше Учалы районының Көсөк ауылы зыяратына алып барып ерләйҙәр.

**Азат ЯРМУЛЛИН, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт китап палатаһы директоры.**



*Советтарҙың IX Бөтә Рәсәй съезы. Башҡортостан делегацияһы. Һулдан уңға ултыралар: партияның БАССР өлкә комитетының ҡатын-ҡыҙҙар мәсьәләһе буйынса бүлек мөдире Рабиға Ҡушаева, БашЦИК рәйесе Муса Мортазин (уртала), уның уң яғында РСФСР милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариатының БашЦИК янындағы вәкиле Шәриф Манатов. Мәскәү ҡалаһы, 1921 йылдың декабре.*

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Һалйоттар

Салжуиттар - һалйоттарҙың ата-бабалары, улар борон-борондан ҡатайҙар һәм наймандар менән аралашҡан. Һалйоттар ҡатайҙар һәм наймандарҙың араһына инеп, Алтайҙа һәм көньяҡ Себерҙә көн итеп, төрки ҡәбиләләрҙең йоғонтоһона ныҡ бирелгән. Һалйоттарҙың ата-бабалары Башҡорт иленә XIII быуатта күскән, шунан улар Урал аръяғын биләгән. Мәскәү архивында был төбәктә барған ер бәхәстәре хаҡында документтар һаҡланған. Хәҙерге ваҡытта Пермь крайы, Свердловск өлкәһендә башҡорттарҙың бик күп ерҙәре бар. Һалйоттарҙың унан күсенеүе Ермактың походы менән бәйле. Беренселәрҙән булып Урал аръяғына һалйоттар килә, шунан һуң улар терһәктәрҙе һәм һеңрәндәрҙе ҡабул итә. Тарихи-этнографик әҙәбиәттә Урал аръяғы башҡорттары тип Урал тауҙарының көнсығышынан, төньяҡтағы Исәт йылғаһынан алып Яйыҡ ярҙарына тиклемге территорияла йәшәүсе башҡорттар хаҡында яҙыла. XIX быуат һәм хәҙерге заман хеҙмәттәрендә Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ һәм Арғаяш, Ҡорған өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондарында йәшәүсе башҡорттар Урал аръяғы башҡорттары тип атала. Этник яҡтан һалйоттар һеңрән, терһәк, бәкәтин ырыуҙары менән бәйле.

## Башҡорт-болғарҙар

Волганың түбәнге ағымынан күсеп ултырып, болғарҙар башҡорттарҙың бүләр, бәйләр, ғәйнә, йәнәй, юрматы, юрмый һ.б. ырыуҙары менән күрше булып китә. Башҡорт ырыуҙарының бер өлөшө, шул иҫәптән, ғәйнәләр төньяҡтараҡ урынлаша. Волга буйы Болғарының территорияһына сувар, болғар, баранжар, эсгель, берсули һәм урындағы уғыр-башҡорттар ҡәбиләләре биләмәләре инә. Болғар Волга буйында һәм көнбайыш Уралда йәшәүсе халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың яҙмышында ҙур роль уйнай. Башҡорт ғалимдары был теманы урап үтергә тырыша, әммә улар Волга буйы Болғары барлыҡҡа килеүҙә башҡорттарҙың ролен билдәләй. Ҡайһы бер ғалимдар башҡорт ырыуҙары араһында болғар ырыуы барлығын да таный Мәҫәлән, Р.Ғ. Кузеев ғәйнә башҡорт ырыуының болғар-уғыр этник компонентҡа инеүе хаҡында яҙып үтә.

С.И. Руденко яҙыуынса, VII-VIII быуаттарҙа болғарҙарҙың бер өлөшө башҡорт халҡы составына инә. Башҡорт-болғарҙар ошо рәүешле барлыҡҡа килә. Улар башҡорт ҡәбиләләре менән берлектә Болғарҙа берҙәм башҡорт халҡын тәшкил итә. Тарихта Биләр ҡалаһында йәшәп, 1165 йылда вафат булған башҡорт Яҡуп ибн Ноғмандың исеме теркәлеп ҡалған. Ул беҙҙең көнгә килеп етмәгән "Болғар тарихы" китабын яҙған.

Болғарҙы өйрәнеүсе тарихсылар болғарҙарҙы Болғар дәүләте составындағы ҡәбиләләрҙе ойоштороусы ҡәбилә итеп күрә. Болғар составында сыуаштар, башҡорттар һ.б. ҡәбиләләр булған. Ҡыпсаҡтар, мәҫәлән, башҡорттар составында ла, болғарҙар составында ла булған. Һуңынан башҡорт-болғарҙар башҡа эрерәк башҡорт ҡәбиләләренә йә Ҡаҙан татарҙарына ҡушылған.

Болғар территорияһы Иҙел-Урал дәүләтенә - Болғар ханлығына ҡарағанда бәләкәйерәк булған, унда төп халыҡты бөрйәндәр тәшкил иткән. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, шул иҫәптән башҡорт-болғарҙар Кама аръяғын, Каманың уң яҡ ярындағы урманлы-далалы ерҙәрҙе биләгән. Иҙриси яҙыуынса, "башҡорттарҙың йолалары болғар төрөктәренеке кеүек булған, улар оҙон халат кейгән". Уралға һәм Кама буйына Ислам диненең таралыуы был халыҡтарҙың берҙәмлеген нығытҡан. XX быуатта башҡорт-болғар ҡәбиләләре башҡорт, татар, сыуаш һ.б. халыҡтар араһында эреп юҡҡа сыҡҡан.

**(Дауамы бар).**

***✓ Төрлө ҡыйынлыҡтарҙы йырып сығырға тура килә. Адвокаттың таяныр саралары бик сикле. Ә дәүләт органдарыныҡы - бик ҙур. Ләкин беҙ еңәбеҙ һәм ҡыйын булһа ла беҙгә ышанып килгән кешеләрҙе яҡлайбыҙ.***

# БАРЫБЫҘ ҘА республика беҙҙе

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Мәскәү ҡалаһында эшләп йөрөүсе юрист Рәмил Сәйфитдин улы ТАЙМАҪОВ. Уны тәүҙә, Мәскәүҙә уҡып йөрөүсе студент, тип таныштырғайнылар. "Студент ҡына башы менән "Заман башҡорто" кеүек мәртәбәле рубрикабыҙҙа баҫылырлыҡ ниндәй ҙур эштәр атҡарып өлгөрҙө икән?" - тигән һымағыраҡ икеле уйҙар менән башланым әңгәмәбеҙҙе һәм... Беренсе һорауымдан уҡ Рәмил Таймаҫовтың студент түгел, ә уҡыу йылдарын артта ҡалдырып, етди генә фирмала адвокат булып эшләп йөрөүен белдем. Ә һөйләшеү бик ҡыҙыҡлы булды, хатта бер урында мин шул тиклем әҫәрләнеп китеп Рәмилдең ҡулын ҡыҫырға ырғып торҙом. Әңгәмәселәрен рухландыра торған кеше булып сыҡты Рәмил Таймаҫов. Шулай итеп, әңгәмә барышында милләттәшебеҙ беҙгә хоҡуҡ, шәхес азатлығы тураһында үҙ фекерҙәрен асасаҡ, ҡайһы бер сетерекле һорауҙарға ла яуап бирәсәк. Бар яуаптары ла актуаль яңғырағандай тойолдо миңә. Хәйер, барыһы ла - уҡыусы хөкөмөндә...**

**Рәмил, иң тәүҙә үҙегеҙҙең ҡыҫҡаса биографияғыҙҙы һөйләп үтһәгеҙ ине...**

- Мин 1988 йылдың декабрендә Хәйбулла районы Подольск ауылында тыуғанмын. 9-сы синыфҡа тиклем тыуған ауылым мәктәбендә уҡыным. Унан Өфө юридик колледжында, Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институтында (специалитет), Мәскәү ҡалаһындағы Юғары иҡтисад мәктәбенең хоҡуҡ факультетында (магистратура) юғары белем алдым. Мәскәүгә юлланыр алдынан бер йыл "Башнефть" акционерҙар йәмғиәтендә баш юрист булып эшләп алдым. Өсөнсө йыл инде Мәскәү ҡалаһында адвокат, юрист-практик булып эшләйем, фән менән шөғөлләнәм.

**Мәскәү һынлы Мәскәүҙә хоҡуҡ яҡлау өлкәһендә эшләү еңел түгелдер. Шулай ҙа һеҙҙе баш ҡала нимәһе менәндер ылыҡтырған...**

- Мәскәү үҙенең кешеләре менән оҡшай. Унда төрлө төбәктәрҙән, төрлө ҡалаларҙан, хатта төрлө илдәрҙән бик күп йәштәр эшләй, уҡый. Улар менән аралашыуы бик ҡыҙыҡ. Төрлө мәҙәниәттәре, төрлө милләттәре, төрлө телдәре менән ҡыҙыҡ ул Мәскәү.

**Ошо үҙенсәлекле "винегрет"та ҡайнайһығыҙ, тимәк. Ишетеүемсә, һеҙҙең эштә психолог булыу ҙа талап ителә?**

- Әлбиттә. Адвокаттар ойошмаһындағы етәксебеҙ беҙгә һәр ваҡыт: "Тәү сиратта һеҙ - кеше, психолог", - тип әйтә килә. Ысынлап та, төрлө кешеләр килә беҙгә. Эштән һуң ҡайһы берҙә әсәйемә шылтыратып: "Әсәй, беҙ шул тиклем бәхетле икән. Миңә эшемдә шул тиклем тетрәндергес яҙмышлы кешеләр менән осрашырға тура килә", - тип әйтеп алам. Ул кешеләрҙе тура юлға баҫтырыу, яҡшыға ышандырыу өсөн, әлбиттә, тәүҙә - психолог, унан һуң ғына юрист булырға кәрәк. Ә миндә психолог сифаты бар икән, ул тәбиғәттән, Аллаһы Тәғәләнән бирелгәндер, тип уйлайым. Ҡайһы берҙә, әгәр ҙә ошо өлкә булмаһа, мин ҡайһы өлкәлә эшләр инем икән, тигән уйға ла ҡалғаным бар. Икенсе өлкәлә эшләүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым. Әлбиттә, уҡытыу ҙа оҡшай миңә. 5-се синыфта уҡығанымда үҙемә: "Мин мотлаҡ юрист буласаҡмын, хоҡуҡты өйрәнеп, кешеләрҙең хоҡуҡтарын яҡлаясаҡмын, кешеләргә хеҙмәт итәсәкмен", - тигән әйтеү әйткәйнем. Юрист булып эшләүемә, ошо өлкәгә килеүемә бер тапҡыр ҙа үкенес тойғоһо кисергәнем булманы. Был - минең урыным, был - минең булмышым, тип, оло киңәнес, ғорурлыҡ һәм ышаныс менән әйтәм.

**Үҙ урынында эшләүҙән дә ләззәтләрәк хәл-торош бармы икән ул хеҙмәт кешеһе өсөн! Шулай ҙа, эшегеҙ еңел түгелдер... Ни тиһәң дә, бәләгә тарыған кешеләр менән эшләйһегеҙ бит. Әллә еңелме был эш?**

- Беҙ һәр ваҡыт кешене яҡлайбыҙ. Йыш ҡына дәүләт органдарына ҡаршы торорға тура килә. Дәүләт органдарының репрессия аппараты бик көслө. Ябай кешегә, йәки уның адвокатына шундай көслө дәүләт машинаһына ҡаршы тороу еңелдән түгел, әлбиттә. Төрлө хәлдәр килеп сыға. Беҙ ҙә төрлө кешеләрҙе яҡлайбыҙ. Янауҙар ҙа ишетәһең. Милеккә ҡағылышлы һорауҙар айырыуса сетерекле, үҙегеҙ аңлап тораһығыҙ. Мәскәүҙә фатирҙың да, ҡалған милектең дә хаҡы нык юғары. Төрлө ҡыйынлыҡтарҙы йырып сығырға тура килә. Адвокаттың таяныр саралары бик сикле. Ә дәүләт органдарыныҡы - бик ҙур. Улар менән ярыш процесында көрәшеү еңелдән түгел. Ләкин беҙ еңәбеҙ һәм ҡыйын булһа ла беҙгә ышанып килгән кешеләрҙе яҡлайбыҙ. Адвокаттың берҙән-бер ҡоралы - закон һәм хоҡуҡ. Сетерекле һорауҙар килеп тыуған осраҡта йыш ҡына беҙҙе берәү ҙә яҡламай: дәүләт тә, хатта адвокаттар берлеге лә... Рәсәй Федерацияһы кимәлендә ысынлап эшләгән адвокаттар берлеге лә юҡ ул. Улар хатта ҡайһы берҙә беҙгә ҡаршы килеп тә ҡуя.

**Ә хеҙмәтегеҙҙең бындай ҡаты шарттары тураһында эшкә урынлашыр алдынан уҡ белә инегеҙме?**

- Мин университетта уҡығанымда уҡ "боласы" инем. Карьерист булһам, мин хәҙер "Башнефть" акционерҙар йәмғиәтендә эшләп йөрөгән булыр инем. "Башнефть" компанияһында эшләгәнемдә мин бик ҙур эш хаҡы ала инем. Ә унан да алдараҡ мин "Башинформсвязь" компанияһының бик бай төҙөлөш предприятиеһында юридик бүлек мөдире булып эшләнем. Әлбиттә, мин үҙем тураһында ла ҡайғыртам, ләкин үҙемде беренсе урынға ҡуймайым. Әгәр беренсе урынға ҡуйһам, үҙемдең мөлкәтемде, торлаҡ менән бәйле һорауҙарымды күптән хәл иткән булыр инем, "Башнефть" акционерҙар йәмғиәтендә рәхәтләнеп, "сәғәтле" эштә тик йөрөр инем.

Адвокат эшен күптәр шул тиклем аҡсалы, тип уйлай. Әлбиттә, аҡсаһы бар уның. Ләкин ул аҡсаны алыр өсөн күүп йүгерергә, "ең һыҙғанып" эшләргә кәрәк. Мәскәү һымаҡ ҙур ҡалаларҙа ул һөнәр бик хәүефле һанала. Янауҙар тураһында әйттем. Беҙҙең адвокаттар бюроһы нык шау-шыулы енәйәт эштәрендә ҡатнаша. Журналист Политковская эшендә, Буданов эшендә, хиджабтарҙы тыйыу эшендә, мәҫәлән. Беҙҙең етәксебеҙ - Морат Мусаев, чечен кешеһе, нык билдәле, көслө адвокат. Ситтә яҡлау таба алмай, өмөттәре өҙөлөр сиккә еткән, Юғары суд хөкөмөнә тапшырылған кешеләр, ғәҙәттә, беҙгә килә.

Ә миңә ауыр һорауҙарҙы хәл итеү оҡшай. Сөнки мин бала саҡтан бер нәмәнән дә ҡурҡманым. Хоҡуҡ институтында уҡып йөрөгән сағымда минең дуҫ-иштәрҙе институт етәкселеге "ҡыҫа" башланы. Мин көсһеҙ яҡты яҡлаштым. Миңә: "Һинә һорауҙар юҡ. Ни эшләп һин уларҙы яҡлайһың?" - тине институт етәкселеге. Әйткәндәй, мин улар менән дә яҡшы таныш, дуҫ инем инде.

Мин Өфөлә нык рәхәт йәшәнем. Шәмбе һайын Хоҡуҡ институтында лекциялар уҡыным, "Башнефть" компанияһында эшләнем. Эш хаҡым шул тиклем яҡшы булды.. "Башнефть" компанияһына мин нисек эләктемме? Минең атай-әсәйем ябай кешеләр, тимәк, танышлыҡ-туғанлыҡ аша түгел. Бишенсе курста беҙҙе бер юрист-практик уҡытты. Бер мәл ул мине үҙенең булмәһенә саҡырҙы ла: "Һеҙ ҡайҙа эшләргә теләр инегеҙ?" - тип һораны. Мин үҙемдең ҙур төҙөлөш фирмаһында юридик бүлек мөдире булып эшләп йөрөүем тураһында әйттем. "Беҙгә, "Башнефть" компанияһына килергә теләмәйһегеҙме?" -тигән һорауға мин: "Уйлайым әле", - тип яуап бирҙем. Атай-әсәйем менән кәңәшләшкәс, был компанияға барырға, унда эшләүсе белгестәр менән танышырға ҡарар иттем. Компанияның кадрҙар бүлегенә барғайным, миңә эш хаҡым күпме буласаҡ икәнен хәбәр иттеләр. Мин шаҡҡаттым. Бухгалтер минең был хәлемде күрҙе лә: "Аңлап торам, аңлап торам. Һеҙ "Башнефть" компанияһында шундай ҙур эш хаҡы көткәнһегеҙҙер. Борсолмағыҙ: премия буласаҡ. Был оклад ҡына. Күтәреләсәк ул. Әлбиттә, әлегә эш хаҡы әҙ инде, аңлап торам. Әммә һеҙ борсолмағыҙ", - тимәһенме! Мин тағы ла нығыраҡ шаҡҡаттым... Ошо компанияла 1 йыл эшләгәндән һуң үҙемдең белемемде Мәскәүҙә камиллаштырырға ҡарар иттем.

**Һеҙ үҙегеҙҙең "боласы" булыуығыҙҙы әйтеп, мине нык аптыраттығыҙ әле. Тәү ҡарашҡа, киреһенсә, компромисс яғына нығыраҡ ауыша торғандарға оҡшағанһығыҙ. Ә Мәскәүҙә бындай эш хаҡына өмөт иттегеҙме һуң?**

- Мәскәүҙә бер танышымдың тәҡдиме менән мине ҙур ғына бер нефть химияһы компанияһында эшкә саҡырҙылар. Бында ла эш хаҡы юғары буласаҡ, тинеләр. Миңә системалағы бәләкәс кенә "шөрөп" булыу перспективаһы оҡшаманы. Мин үҙемде кешеләр мәнфәғәтен яҡлаусы итеп күрә инем. Тәүге ярты йыл бик ҡыйын булды. Хәҙер мин адвокатурала өсөнсө йыл эшләйем. Атай-әсәйемә рәхмәт, улар ауылдан тороп миңә нык ярҙам итте. Йайлап-йайлап әлеге кимәлгә килдем. Бөгөн мин "Мусаев һәм партнерҙар" адвокат бюроһы адвокатымын, саҡырылған уҡытыусы шартында МДУ-ла һәм Юғары иҡтисад мәктәбендә лекциялар уҡыйым.



***РӘМИЛ ТАЙМАҪОВ:***

*Мәскәү менталитеты бөтөнләй икенсе. Мәскәү мәҙәниәтендәге бәхәсләшеү стиле, азатлыҡ хисе университет мәҙәниәтенән килә. Беҙҙең Башҡорт дәүләт университетында, Хоҡуҡ институтында профессор - батша, солтан. Ә Мәскәүҙә - һинең менән типә-тиң кеше. Рәхим итеп, бәхәсләш. Лекция бара, ҡулыңды күтәрәһең дә: "Бына мин һеҙҙең менән килешмәйем. Минең уйымса..." - тип, үҙ фекереңде әйтергә була. Уҡытыусы: "Бик яҡшы. Әйҙә, ошо һорауыңды үҙеңдең ғилми эшеңдә үҫтереп ебәр", - тип ҡыуанып китә. Бер һүҙ менән әйткәндә, Мәскәү университеты...*

***✓ - Мин - патриотмын. Ундай уй ҙа бар. Ләкин республика беҙҙе ҡаршыларға әҙер түгел әлегә. Мәскәү ҡалаһында шул тиклем уҡымышлы, рухлы башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары бар.***

# ҠАЙТЫР ИНЕК...

## ҡаршыларға әҙер булһа әгәр

**Бәлки, был риторик һорауҙыр: Рәсәйҙәге хоҡуҡ һаҡлау башҡа илдәрҙәге хоҡуҡ һаҡлау менән бер кимәлдәме?**

- Рәсәй Федерацияһындағы хоҡуҡ системаһы камиллыҡтан алыҫ әле. "Гражданское законодательство"ны әйтәм. Ул ни эшләп камил түгел, тиһегеҙҙер? Законда бөтәһе лә шул тиклем яҡшы яҙылған, һүҙ тейгеҙерлек урын юҡ. Ләкин уны тормошҡа ашырыу кимәле бик түбән. Беҙгә йыш ҡына: "Беҙ, әлбиттә, аңлайбыҙ: законда шулай яҙылған, ләкин беҙ улай эшләй алмайбыҙ (эшләмәйбеҙ, теләмәйбеҙ)", - тип әйтеүселәр бар. Хоҡуҡ ул - законда нимә яҙылған, шул түгел. Хоҡуҡ ул - урамда һиңә полицейскийҙар нисек мөрәжәғәт итә - шул. Шунан сығып ҡарағанда, ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙең хоҡтап иттем. Һүҙҙе: "Леонид Рудольфович, мин һеҙҙе ныҡ хөрмәт итәм", - тип башланым һәм оҙаҡ ҡына ғәфү үтендем. Һүҙемдең аҙағында: "Ләкин мин ошо мәсьәләлә һеҙҙең менән килешмәйем", - тинем. Ул, аптырап, миңә ҡараны ла: "Бик яҡшы, Рәмил, килешмәүең бик яҡшы. Һинең 30-40 минут буш ваҡытың бармы? Булһа, хәҙер кафедраға инәбеҙ, сәй эсәбеҙ. Унан әңгәмәне дауам итәбеҙ", - тине. Ярты сәғәткә генә иҫәпләнгән әңгәмә 2-3 сәғәткә һуҙылды ла ҡуйҙы. Профессор мине шундай ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы, ҡайһы бер фекерҙәремде хатта яҙып алды.

Мәскәү менталитеты бөтөнләй икенсе. Мәскәү мәҙәниәтендәге бәхәсләшеү стиле, азатлыҡ хисе университет мәҙәниәтенән килә. Беҙҙең Башҡорт дәүләт университетында, Хоҡуҡ институтында профессор - батша, солтан. Ә Мәскәүҙә - һинең менән типә-тиң кеше. Рәхим итеп, бәхәсләш. Лекция бара, ҡулыңды күтәрһәң дә: "Бына мин һеҙҙең менән килешмәйем. Минең уйымса..." - тип, үҙ фекереңде әйтергә була. Уҡытыусы: "Бик яҡшы. Әйҙә, ошо һорауыңды үҙеңдең ғилми эшеңдә үҫтереп ебәр", - тип ҡыуанып китә. Бер һүҙ менән әйткәндә, Мәскәү университеты... Был күренеш мине, әлбиттә, бик ҡыуандыра.

Мәскәү менталитетына бәйләп, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов тураһында ла үҙ фекеремде әйтеп үтәйем әле. Етәксе булараҡ, уны төрлө яҡтан ҡарарға, баһаларға булалыр. Уның позицияһының ыңғай яғы шул: ул - либерал. Ниндәй генә тәнҡит юҡ бит уның адресына. Тимәк, ул тәнҡиткә, бәхәскә урын ҡалдыра. Диалогка инә белә. Минең уйымса, был Мәскәү, ҙур ҡала мәҙәниәте кимәлелер...

**Беҙҙәге ниндәй күренештәр һеҙҙе ҡыуандыра һәм ҡайһылары - хафаландыра?**

- Яҡшы күренештәр, тип, саммиттарҙы әйтә алам. ШОС һәм БРИКС саммиттары барған ваҡытта Мәскәүҙә Өфөнө белеп ҡалдылар. Матбуғатта, телевидениела, сайттарҙа Өфө яңғырап торҙо. Өфөлә халыҡ-ара һәм бөтә Рәсәй фестивалдәре, конкурстары йышыраҡ үтә башлауы ла бик яҡшы күренеш.

Насар күренештәрҙән нимәне әйтәйем? Башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһендә килеп тыуған хәл мине бик борсой. Был тәңгәлдә ниндәйҙер ыңғай ҡарарҙар табылырға тейеш. Башҡорт теленең дәрәжәһен һаҡлап ҡалыу - республикала милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең тотороҡлоғон тәьмин итеү ҙә ул. Быны барыһы ла аңларға тейеш.

**Ҡайһы бер һорауҙарҙы хәл иткәндә һеҙҙең башҡорт менталитетындағы бәғзе бер һыҙаттар ҡамасаулап та ҡуйғаны бармы?**

- Ысынлап та, башҡорттоң да, татарҙың да менталитетында ниндәйҙер феодаллыҡ һыҙаттары бар ул. Мәскәүҙә тәүге йылдарҙа уҡығанда әлеге менталитетым үҙен һиҙҙерә торғайны. Бер миҫал: миңә магистрҙар фатирына урынлашырға кәрәк ине. Бер танышыма: "Ректорға нисек йоғонто яһарға, берәй абруйлы кеше аша әйттерергәме икән?" - тигәйнем, ул: "Ниңә улайтырға? Ректорға ғариза яҙаһың - барыһы ла ап-асыҡ", - тине. Шулай булды ла, минең ғариза шунда уҡ мәсьәләне ыңғай хәл иткән ҡултамға ҡуйылды. Беҙ бит инде Башҡортостанда бындай мәсьәләләрҙе танышлыҡ, "ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ" ярҙамында хәл итеп өйрәнгәнбеҙ. Был беҙҙең ҡанға һеңгән.

**Шәхси үҫеш темаһы, моғайын, күп йәштәрҙе ҡыҙыҡһындырыр. Һеҙҙең шәхси үҫешкә иң ныҡ йоғонто яһаған ниндәй факторҙар булды? Моғайын, үҙ өҫтөгөҙҙә эшләүҙер, уҡыуҙыр...**

- Минең өләсәйем бала сағынан фермала быҙау ҡараусы булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡанса 50 йыл хеҙмәт иткән. Дүрт класс ҡына белеме менән ул тырыш хеҙмәте өсөн өс мәртәбә Мәскәүгә ВДНХ-ға ебәрелгән, Горбачев менән бер трибунала ултырған. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Ленин ордендары менән наградланған. Уның тормошо ныҡ ауыр булған. Сәғәт 4-тән тороп, фермаға китә, өйҙә лә малдары бар. Мин унан: "Нисек һин, 4 класлыҡ ҡына белемең менән шундай ҙур дәрәжәләргә ирештең?" - тип һораным. Ул: "Ышаныс, Хоҙайға ышаныс арҡаһында", - тип яуап бирҙе. Кешелә дин, ышаныу, ғәҙеллек идеяһы булһа, ул бөтөн ҡыйынлыҡтарҙы йырып сыға. Әгәр шулар булмаһа, 3-4 телде лә белергә була, 3-4 университетты ла тамамларға була, ләкин ул ҙур дәрәжәләргә өлгәшә алмаҫҡа мөмкин. Мәскәүҙә минең менән башлыса Мәскәү егеттәре эшләй. Мәскәүҙә тыуып үҫкән кешеләр, асылда, бик ялҡау. Улар "еңел аҡса" ярата. Улар йыш ҡына: "Мин был эште алмайым, Рәмил, һин ал, һин эште яратаһың, унда аҡсаһы ла күп түгел, 200-300 мең генә. Ҡыҙыҡ түгел", - тиҙәр. Эште асып ҡараһаң, унда шул тиклем тетрәндергес мәсьәләләр... Шундай яҙмыштар... Нисек ярҙам итмәйһең инде. Мәскәүҙәр кешенең тормошона ла, нисектер, еңел генә ҡараған һымаҡ тойолоп китә. Был, моғайын, уларҙың ышанысы юҡлыҡтан киләлер, тип уйлайым.

**Үҙенсәлеке яуап булды был. Көтмәгәйнем. Был һорауҙы биргән ваҡытта һеҙҙән ниндәйҙер китаптар уҡыуға ҡағылышлы кәңәштәр ишетермен, тип көткәйнем...**

- Мәскәү дәүләт университетында саҡырылған уҡытыусы шарты менән уҡытам, тип әйткәйнем инде. Төпкөл төбәктәрҙән ауыл егеттәре, ҡыҙҙары килә. Белем нигеҙҙәре ҡала кимәленән түбән булһа ла, уларҙың тырышлығы, дәрте, күҙҙәре янып тороуы бөтөн ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сығасаҡтарына ишаралай. Шуға, ауылда тыуып үҫеү, ауыл мәктәбен тамамлау ҡайһы ваҡыт уҡ бөгөнгө көндә бик насар эшләй.

**Мәскәү менән Өфө ҡалалары араһында айырма һеҙгә нык һиҙеләме?**

- Эйе. Мәскәү кешеһе үҙен нык хөрмәт итә, ярата. Ул үҙенең хоҡуҡтарын яҡшы белә, улар өсөн һәр ваҡыт көрәшә. Шуға ла Мәскәү адвокаттары яҡшыраҡ йәшәй. Тағы, Мәскәү кешеһе адвокатҡа аҡса йәлләмәй - үҙ дәғүәләрендә аҙаҡҡаса барырға әҙер.

Шуныһын да әйтергә кәрәк, Мәскәү кешеһе дәүләт органдары менән, ҙур корпорациялар менән бәхәскә инеүҙән ҡурҡмай. Быныӊ сәбәбе ниҙә? Беренсенән, Мәскәү нык ҙур. Эште лә, торлаҡты ла табырға була. Судтан һуң кешегә йоғонто яһау бик ҡыйын. Икенсенән, Мәскәү ҡалаһында дәүләт органдары, башҡа төбәктәрҙәге коллегаларына ҡарағанда, ябай халыҡҡа асығыраҡ. Ни өсөн тиһегеҙме? Менталитет икенсе.

Үҙемдең тормошомдан бер миҫал. Юғары Иҡтисад мәктәбендә магистратурала уҡығанда бер профессорға аптыраным. Уның лекцияһын тыңланым да: "Был профессорҙы нисек эшенән ҡыумайҙар һәм нисек уны төрмәгә ултыртмайҙар?" - тип уйланым. Унда студент саҡтан кешегә азатлыҡ идеяһын һеңдерәләр. Әлбиттә, ошо идея менән уҡыған кеше университеттан бөтөнләй икенсе кеше булып сыға. Беҙҙең Башҡорт дәүләт университетында профессорға һорау менән мөрәжәғәт итеү уны мыҫҡыл итеүгә тиң була торғайны. Юғары Иҡтисад мәктәбендә үҙемдең ғилми етәксем менән танышыуым тураһында һөйләйем әле. Бер мәл коридорҙа профессорҙы

**Киләсәктә Башҡортостандың баш ҡалаһына ҡайтырға теләгегеҙ юҡмы?**

- Мин - патриотмын. Ундай уй ҙа бар. Ләкин республика беҙҙе ҡаршыларға әҙер түгел әлегә. Мәскәү ҡалаһында шул тиклем уҡымышлы, рухлы башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары бар. Мин һәр ваҡыт уларға ошо һеҙ биргән һорау менән мөрәжәғәт итәм. Улар барыһы ла: "Ҡайтыр инем. Эшләр инем", - тип яуап ҡайтара. Уларҙың талаптары ла ҙур түгел - һөнәрҙәренә яраҡлы эш булһын. Хөкүмәт уларға шул эште тәҡдим итһен. Улар ҡайтһа, республикаға ҙур ярҙам булыр ине, сөнки белгестәр, кадрҙар ҡытлығы барыбер үҙен һиҙҙерә бит. Мин дә ҡайтыр инем, ләкин Мәскәүҙәге шарттар Өфөлә юҡ әлегә.

**Әйҙә, әлегә уңышлы йәштәр Башҡортостанға, халҡына "ситтән тороп" ярҙам итһен. Уңышҡа өлгәшәләр, үҙ милләте вәкиле менән ғаилә ҡоралар, милләткә балалар үҫтерәләр икән, был да яҡшы бит...**

- Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы эшләп килә. Ассоциация йәштәргә төрлө яҡлап ярҙам итә, адаптация үткәрә, матур милли саралар үткәрә, башҡорт йәштәренең үҙ-ара аралашыуына (шулай уҡ бер-береһен табышып, өйләнешеүенә лә) булышлыҡ итә. Әммә ассоциацияның бурыстарын тағы ла киңәйтергә, уны тотош бер институт системаһына әйләндерергә кәрәк, минеңсә. Уның төп, беренсе маҡсаты - башҡорт йәштәрен яңы мөхиткә, заманса шарттарға яраҡлаштырыу, уларҙа дипломатлыҡ сифаттары тәрбиәләү булырға тейеш, тип уйлайым. Үҙемдән алып әйтәм: беҙ дипломат түгел. Мин дипломатлыҡҡа яңы өйрәнеп кенә киләмдер, бәлки. Менталитетыбыҙҙа дипломатлыҡ, "йомшаҡ көс" тигән төшөнсәне булдырырға кәрәк. Сәйәси һорауҙарҙы дипломатик юл менән хәл итеп өйрәнергә кәрәк.

Ғалимдарыбыҙ әҙ. Юриспруденцияла беҙҙең милләт вәкилдәре бөтөнләй юҡ тиерлек. Рәсәй кимәленә сығырлыҡ, ғалимдар тәрбиәләрлек көслө университеттарыбыҙ юҡ. Уҡырға һәм уҡырға! Мифтахетдин Аҡмулла әйткән был һүҙ актуаллеген юғалтмаған әле. Ҡайһы саҡта республикала йәштәрҙе Мәскәүгә уҡырға бармаҫҡа өндәүҙәр ҙә ишетелеп ҡала. Әммә мин был ҡараш менән килешмәйем. Йәштәребеҙ Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа, хатта сит илдәргә уҡырға барһындар, ҡурҡмаһындар. Йөрөһөндәр, илдәр күрһендәр, сит телдәр өйрәнһендәр, башҡа милләт вәкилдәренә асыҡ булһындар. Беҙ нисектер үҙ эсебеҙгә, үҙ йәмғиәтебеҙгә йомолғанбыҙ. Башҡорттарға башҡа халыҡтар менән аралашып, дуҫлашып өйрәнергә кәрәк. Ә инде ситтәр араһына барып ингәс-ингәс, үҙеңде тик яҡшы яҡтан күрһәтеү, үҙеңдең ниндәй милләт балаһы булыуыңды онотмау мөһим. Был беҙгә тиңдәр араһында тиң булып йәшәргә, үҙебеҙгә хөрмәт уятырға ярҙам итәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәмил Таймаҫовҡа Рәсәйҙәге хоҡуҡ һаҡлау тармағы тураһында һорау бирер алдынан: "Был һорауҙы бирһәм, оҡшармы?" - тип һорап алғайным. Ул: "Бирегеҙ, әлбиттә. Ул һорауҙы беҙ, адвокаттар күтәрмәһәк, тағы кем күтәрһен..." - тигәйне. Батыр егет, һүҙ юҡ! Бына шундай милләттәшебеҙ, халҡыбыҙҙың алдынғы ҡарашлы улдарының береһе эшләй Мәскәүҙә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.**

***✓ Мин мейесте емереп бөтөп, ер менән тигеҙләп, тапап, изып, балтаны бар көсөмә иҙән уртаһына ҡаҙап, ишектәрен шарт ябып, ялпылдап ҡайтып киттем.***



ҺАБАҠТАР

# АСЫУ - АЛДАН, АҠЫЛ - АРТТАН...

Бер туған иң бәләкәй һылыуым ауылға кейәүгә сығып, кейәүе менән яңы ғына донъя көтә башлағайнылар. Икәүһе лә эшләп йөрөгәнгә, күрше ауылдан буш торған совхоз өйөн биргәндәр. Ҡәҙемге генә иркен, ике бүлмәле өй ине ул. Утын һалғысы, келәте, һарайы бар, йәшәрлек инде былай, үҙҙәре ҡасан йорт төҙөй алғансы ярарлыҡ.

Тик төпкө бүлмәһенең мейесе насар булып сыҡҡан. "Апай, ҡыйынһынһаң да, мейес сығарып бир инде. Эштә йөрөйһөң, ваҡытың да юҡ, шулай булһа ла, бәлки, риза булырһың?" - тип килгәндәр. Йәшәй башлауҙары яңы, ят кешене яллап, мейес сығартып, аҡса түләп хитланмаһындар, тип, үҙем мейес сығарып бирергә булдым быларға.

"Тик тиҙ генә эшләп бөтөп булмаҫ, эштән ҡайтҡас, һөт һалып (сепараторҙан үткәреп), өй эштәрен теүәлләгәс, балаларҙы ҡарағас, көн дә килеп эшкә (йәйләүгә киске һауынға) киткәнсе эшләрмен. Оҙаҡҡа һуҙылһа ла сыҙайһығыҙ инде", - тинем. Тегеләрҙең ризалашмай әмәлдәре юҡ.

Шулай итеп, көн дә барып, мейес сығара башланым, өс километр араны йәйәү барам, йәйәү ҡайтам. Йәш саҡта йәйәү йөрөү үҙе бер кинәнес бит ул, бигерәк тә беҙҙең яҡтың тәбиғәте йәнгә шатлыҡ, тәнгә сихәт бирә. Шулай ҙа оҙаҡҡараҡ һуҙылып китте был мейес сығарыу, йәштәр икәүһе лә эштә, миңә ярҙам итер кеше юҡ. Балсығын болғап әҙерләп, кирбесен алып биреп тороусы булһа, йәтеш тә, тиҙерәк тә булыр ине лә һуң. Бер үҙем эшләгәс, ауырға ла тура килде, оҙаҡҡа ла һуҙылды шул, минең бирлелек үҙен һиҙҙерә башланы. Ҡаным ҡыҙып, саҡ ҡына осҡонға ла дөрләп тоҡанырға торғанымды һиҙәм. Әммә үҙемде ҡулда тоторға, кейәү менән һылыуыма һиҙҙермәҫкә тырышам. Мине көсләп ҡушыусы булманы бит, үҙем ризалыҡ бирҙем, берәүгә лә һуҡрана алмайым инде. Муйынлап алғас, һүҙ биргәс, мотлаҡ үтәү фарыз.

Әмәлгә ҡалғандай, берҙән-бер көндө беҙгә әсәйем килде, хәҙер инде эшемде тиҙерәк тамамлай алырмын, тип ҡыуандым. Иртәнге һауындан йәйләүҙән ҡайтам да, өйҙәге тауыҡ сүпләһә лә бөткөһөҙ эштәр менән мәшәҡәтләнеп тормай, күрше ауылға юлланам. Әсәйем бар эште лә еренә еткереп үтәй, балаларымды ла ҡарай, һәр кәрәк нәмәне теүәлләп, эшләп тә ҡуя. Тел йоторлоҡ тәмле ризыҡтар бешереп, кейәүен дә, ейәндәрен дә һыйлай, хатта миңә лә ҡалдырып, һауынға ашатып ебәрә. Әсәй, әсәй инде ул! Ҡайҙа ғына барһа ла, бөтәһен дә хәстәрләп, тәрбиәләп кенә тора. Ул яҡтан күңелем тынысланды минең. Мейестең инде мөрйәһен генә сығараһы ҡалды, ҡыйыҡ эсендә бурай биреп, торба ултыртһам, әҙер тигән һүҙ. Унан һуң инде, эшләнгән эшемә ҡәнәғәт булып, ҡыуанаһы ғына ҡала. Әҙер мейесте һылап, ағартып, яғып ебәрһәк, ҡыуанысыбыҙ икеләтә артып китер әле, үҙе ҡулың менән эшләгән эшеңдең уң булғанына ни етә һуң! Айырыуса кинәнес бит ул!

Әммә уйламағанда хәл-ваҡиғалар бөтөнләй икенсе юҫыҡҡа боролоп китте бит әй! Түбәгә менергә баҫҡыс кәрәк, кейәү килһә, алып килер, тип көтөп йөрөйөм. Үҙем артҡан бөтөн кирбестәрҙе соланға сығарып теҙәм, кирбес ватыҡтарын, балсыҡ ҡалдыҡтарын, сүп-сарҙы көрәк менән ҡырып, бер урынға өйәм. Әҙ булһа ла эш кәмеһен, аҙаҡтан өйөлгән ҡыйҙы сығарып түгеп, йыуып ҡына алыуы ҡыйын булмаҫ кейәү менән һылыуыма.

Бына улар икәүләшеп килеп инделәр, нимәгәлер үҙ-ара асыуланышҡандары, әрләшкәндәре күренеп тора. Тырт-мырт йөрөй һылыуым да, өндәшер-өндәшмәҫ кейәү ҙә, һүҙҙәре теш араһынан ғына сыға. Мин белмәмеш тә күрмәмеш, өндәшмәйем. Кеше араһына ҡыҫыла торған холҡом юҡ, бигерәк тә ир менән ҡатын араһына яҡын да юламайым.

"Ҡайынбикә, мейесең типтигеҙ матур килеп сыҡҡан, өйҙө йәмләп ултырыр әле", - тип минең күңелемде күрергә тырыша кейәүем. "Һалпы яғына һалам ҡыҫтырма, апайыма һинең маҡтауыңдың хәжәте юҡ!" - тип һылыуым арҡыры төшә. Мин һаман да ләм-мим, бер өн дә сығармайым. Ярар, донъя бит ул, эләгешеп тә алырҙар, килешеп тә китерҙәр әле. Тик бер-береһенә ал бирмәҫкә тырыша инде был икәү, ҡуйырҙан уйҙары юҡ. Бигерәк тә һылыуым ныҡ ҡына үсеккәнгә оҡшай, ҡырҡыу һөйләшә кейәү менән. Иң ахыры мин: "Улай итеп үҙегеҙҙең нервыларығыҙҙы үҙегеҙ бөтөрөмәгеҙ. Бер-берегеҙҙе тыңлап, ишетеп өйрәнегеҙ, кәңәш итеп, килешеп йәшәгеҙ. Оҡшамаған нимәгеҙ булһа, тырт-мырт йөрөгәнсе, уртаға һалып һөйләшеп өйрәнегеҙ", - тип һүҙ ҡыҫтырырға булдым. Ҡайҙан әйткән көнгә төштөм! Китте был һылыуым миңә теләһә ниндәй һүҙ ташлап, 12 йәшкә кесемен, алдымда иң ҙур апайым бит әле, тип уйлау юҡ. Хатта шуға барып етте:"Үҙ өйөмдә мин үҙем хужа, нимә эшләргә, нисек һөйләргә мин үҙем белермен. Һинең өйөң түгел, ҡыҫылышың булмаһын! Эшеңде бөт тә һыпырт бынан!"- тағы әллә нindәй һүҙҙәр һөйләп бөттө был. Минең түҙемем сигенә етте, енем ҡуҙып, тыйып, арҡанлап тотҡан бирлелегем ажғырып килеп сыҡты ла, һылыуым менән кейәү өҫтөнә ябырылды. Уларға зыян килтермәҫ өсөн мин, яңы ғына эшләп бөткән, әле кибеп тә өлгөрмәгән мейесемде, ҡулымдағы балтам менән емерә, ҡыйрата башланым. "Мин һеҙҙең өйөгөҙгә дәғүә иткәнем дә юҡ, кәрәкмәй ҙә. Үҙеңдең дә был өйгә башың инһә, артың инмәгән, хужа булып хәбәр һөйләһәң дә, һинеке түгел, совхоз өйө. Бына һиңә өй, бына һиңә мейес, ҡулыңдан килһә, үҙең сығар ҙа ал! Кешенең ҡәҙерен белмәйһең, эшләнгән эшкә шөкөр итә белмәйһең икән, ошо һиңә таман! Телеңде самалап асырға һабаҡ булыр!"- тип һөйләнә-һөйләнә, мин мейесте емереп бөтөп, ер менән тигеҙләп, тапап, изып, балтаны бар көсөмә иҙән уртаһына ҡаҙап, ишектәрен шарт ябып, ялпылдап ҡайтып киттем.



Был көтөлмәгән хәл икәүһенә лә ҙур шок яһаны, буғай, бигерәк тә кейәүҙең иҫе киткәндер инде... Мин енләнеп мейесте аҡтара һуға башлағанда: "Ҡәйенбикә, ҡуй, улайтмасы әле", - тип кейәү, "Апай емермә, эшләгән эшеңде әрәм итмә, ғәфү ит мине!"- тип һылыуым, яҡынлап ҡаранылар икәүләп, әммә мине туҡтатып алырлыҡ түгел ине инде. Аждаһа сығырынан сыҡҡайны, тыйып алырлыҡ, ҡаршы торорлоҡ көс юҡ ине. Икәүһе лә өнһөҙ, тынһыҙ, мин мейесте аҡтарып, емереп, ҡыйратып бөткәнсе ҡарап торҙолар. Башҡа әмәлдәре лә юҡ ине шул, үҙҙәре ғәйепле, нимә ҡыла алһындар инде! Алдарындағы ҡот осҡос ҡиәфәткә ингән, ҡулына балта тотоп алған, ярһыуҙың арьяғына сыҡҡан бисә, ҡыҙыулыҡ менән үҙҙәрен дә тапап, имгәтмәҫ тимә! Ҡурҡырһың да! "Һыйыр тулаһа, аттан яман" шул булалыр инде.

Шулай итеп, бар ярһыуымды егеп, шәплләп атлап ҡайтып барам. Бына артымдан бер машина ҡыуып етеп, янымда туҡтаны. Кейәүҙең бер туған ағаһы икән: "Ултыр, ҡоҙағый, алып барып ҡуяйым, кейәүең ебәрҙе", - тине был. "Юҡ, ултырмайым!" - тип ишеген шарт ябып ҡуйҙым. "Ҡуй, ҡоҙағый, ултыр! Һеҙ килен менән һүҙгә килешкәнгә мин ғәйепле түгел бит!" - тигәс, ултырҙым машинаға инеп. Бер ауыҙ һүҙ ҙә һөйләшмәй килеп еттек беҙҙең ауылға. Мин рәхмәт әйтеп төшөп ҡалғанда ҡоҙа баш ҡағып ҡына хушлашты...

Әсәйем балаларым менән рәшәткә буйындағы ултырғыста ултыра ине. Минең машинанан төшөүемдән, йөҙөмдән, атлауымдан уҡ берәй хәл булғанын һиҙеп ултырғандыр: "Нимә булды, балам? Бөгөн иртәләгәнһең", - тине лә, бөтәһен дә эстән тойоп, һиҙепаңлап та алды, күҙҙәре менән генә мине өйгә оҙатып ҡуйҙы, үҙе артымдан инергә ашыҡманы. Бер аҙҙан әсә йөрәге түҙмәне, буғай, минең яныма инеп, өндәшмәй генә эргәмә ултырып, һаҡ ҡына башымды һыйпай, иплəп кенә арҡамды һыпыра ине. Эй, шифалы әсәм ҡулдары! Мин тыныслана, яҙыла барып, иҙрәп йоҡлап китәм.

"Балаҡайым, эшеңә ваҡыт етте, уян инде. Тамаҡ ялғап өлгөрә алмай, ас көйө эшеңә китерһең. Тор балам, тор!"- тигән әсәйемдең тауышынан һикереп тороп ултырам. Әсәйем ҡулдарының шифаһы бар тәнемде яҙып, булған арыу-талыуҙарымды һыпырып алғандай юҡҡа сығарған. Шуның менән бергә ул асыу, ярһыуҙарымдан да арындырған ине мине. Мин үҙемде бик еңел, дәртем ашып-ташып торған итеп һиҙҙем йоҡонан тороп тышҡа сыҡҡас.

Минең холҡомдо бик яҡшы белгән әсәйем, бер нәмә лә һорашмай, миңә өҫтәл әҙерләп, аштан һуң тәмле хуш еҫле сәй эсереп, эшкә йыйынғанымды сабыр ғына күҙәтә. Ә мин нисек һүҙ башларға белмәй, баш ватам. 40 йәшкә етһәм дә, һис ҡасан да әсәйемә ауыр һүҙ әйтеп рәнйетеү түгел, миңә ҡарап һуҡранһа ла, ризаһыҙлыҡ белдерһә лә, хатта әрләһә лә, бер ауыҙ ҙа ҡаршы һүҙ әйткәнем дә юҡ. Ә был хәл рәнйетәсәк әсәйемде. Эх! Шул ҡыҙыулыҡ, бирлелек! Ғүмерем буйы көрәшәм ошо яман ғәҙәтем менән. Күбеһенсә мин еңәм, әммә ошондай хәлдәр ҙә килеп сыға. Әсәйемә бит һөйләргә, аңлатырға кәрәк, өндәшмәй эшкә китә алмайым да инде. Беренсенән, был уны эшкә һанамау булып күренер ине, быға мин юл ҡуя алмайым, сөнки әсәйемде йәнемдән артыҡ күрәм. Мин балаһы булған кеүек, һылыуым да уның балаһы, өҫтәүенә, кинйәбикәһе! Белергә уның хаҡы бар! Нисек булһа ла ҡылған эшемде әсәйемә еткерәм. "Уй Алла, балаҡайым! Нишләп кенә эшләп бөткән мейесеңде емерәһең инде? Көсөңдө, ваҡытыңды әрәм итеп! Хәҙер ҡайһылайта инде һылыуың мейесһеҙ?" - тип көйәләнеп китте әсәйем. "Үҙе ғәйепле, әсәй, мин оло башымды кесе итеп, уға эш эшләп йөрөйөм, ә ул, оялмай ҙа, мине мыҫҡыл итә. Быға түҙеп тора алманым инде, һин мине ғәфү ит, әсәкәйем, зинһар, рәнйемә, йәме. Бирешмәҫтәр әле! Ҡышҡыһын туңғылары килмәһә, мейессеһен дә, аҡсаһын да табырҙар! Киләсәктә һабаҡ булыр икеһенә лә!"- тинем. Тик эшкә тип сығып барғанда, әсәйемдең күҙ ҡараштарындағы әсенеү, рәнйеү ҡатыш үкенеү тойғоларын абайлап, йөрәгем телгеләнеп ҡуйҙы. "Ах, шул енләнгән минутта әсәйем иҫемә төшһәсе! Һылыуымды тәкмәстерә һуҡһам һуғыр инем, бер ҙә генә әҙер мейескә теймәҫ инем!"- тип һуңлап ҡына үкенеп ҡуйҙым. Ләкин ҡылынған эш ҡылынған, төҙәтеп булмай ине инде. Үкенеүҙән бер файҙа ла юҡ: "Асыу алдан, аҡыл арттан!" - тип бушҡа әйтмәгәндәрҙер.

...Әсәйемдең был донъянан китеп барыуына 15 йыл булып китһә лә, шул ваҡыттағы күҙ ҡараштары иҫемә төшһә, йәнем тетрәп, йөрәгем сәнсеп ҡуя. Бар булмышым менән уның күңел яраһын тоям. Күп йылдар үтһә лә, яман ҡылығым өсөн тик һинән генә ғәфү үтенәм, әсәйем! Ғәфү ит, зинһар, мине, бирле, дыуамал, яһил ҡыҙыңды! Ғәфү ит!..

**Зилдә ХӘМИҘУЛЛИНА.**

✓ **"Мин бит Беренсе", - тигән. Уны танымаған, унан бигерәк уның әйткән һүҙҙәрен аңламаған йәш ГАИ-шник: "Юҡ, ағай, һин бөгөн беренсе түгел, ә ун икенсе", - тип яуаплаған.**



*ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!*

# КӘМ ҺӨЙЛӘМ

"Кәм һөйләм" тигән төшөнсә бар грамматикала. Синтаксистың был категорияһына ҡараған һөйләмдәрҙә үҙенән-үҙе аңлашылып торған ҡайһы бер киҫәктәр төшөп ҡала. Әммә һөйләмдең мәғәнәһе зыян күрмәй, сөнки кәрәкле мәғлүмәт кәм һөйләмдән алда торған һөйләмдә тулыһынса бирелә. Мәҫәлән:

- Һин кисә ни өсөн дәрестә булманың?

- Ауырыным.

Дөрөҫ яуап: "Кисә мин дәрестә була алманым, сөнки мин ауырыным", -булырға тейеш.

Тағы бер миҫал:

- Һин һөтлө сәй эсәһеңме?

- ...- һөҙ.

"Мин сәйҙе һөтһеҙ эсәм", - тип тулы һөйләм менән яуап бирмәй икенсе әңгәмәсе, хатта "һөтһеҙ" һүҙен "- һөҙ" тигән ижекkә тиклем ҡыҫҡарта.

Кәм һөйләмдәрҙең йөкмәткеһе контекст эсендә аңлашыла. Ләкин башҡорт теле дәресендә балаларҙан барыбер тулы яуап алыуға өлгәшергә кәрәк икәнен һәр башҡорт теле уҡытыусыһы белә һәм шулай итә лә. Әммә беҙ барыбер шул "кәм һөйләм" менән һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ. Улай ғына түгел әле. "Кәм һөйләм" тигәндең тағы ла йәмһеҙерәк бер варианты бар. Ҡарап үтәйек.

Бына матур юбилей кисәһе бара. Ҡотлауҙар, тәбрикләүҙәр, теләктәр...

- Мин һеҙҙе, Фәлән Фәләнович, ихлас күңелдән ҡотлағым килә, йөрәгемдән сыҡҡан оло рәхмәтемде еткерергә теләр инем, һеҙгә рәхмәт әйткем килә...

Әйткең килгәс - әйт, еткерер теләгең булғас - еткер, ҡотлағың килгәс - ҡотла! Нимә унда сәхнәгә сығып, ниәтеңде һөйләп тораһың? "Котлағым килә", тигәс, ләкин ҡотламаҫҡа ла була, тимәксеһеңме?

Быны ошондай нисек теләйһең, шулай дауам итергә мөмкин булған һөйләмдәрҙе мин шулай уҡ "кәм һөйләмдәр", тип атайым. Әйткәндәй, рус телендә лә шулай. "Хочу выразить огромную благодарность..." - тип башлаһалар, мин: " ... но не буду", - тип бөтөрөп ҡуям.

# СӘҒӘТ НИСӘ?

"Өфө ваҡыты 21 сәғәт". Ә ниңә "Өфө ваҡыты киске 9" түгел?

"Өфөлә 24 сәғәт", - тиеү урынына ниңә: "Өфөлә төнгө сәғәт 12", - тип кенә әйтмәҫкә?

13 сәғәт түгел - төшкө (көндөҙгө) сәғәт 1; 14 сәғәт түгел, сәғәт төшкө 2; 19 сәғәт түгел, киске сәғәт (хатта - эңерге) 7. "Сәғәт" һүҙен ҡайһы саҡта әйтмәҫкә лә була. Мәҫәлән: Өфө ваҡыты төнгө 11; Өфөлә таңғы 6.

13 - 24 сәғәт һүҙен таңғы, иртәнге, төшкө, көндөҙгө, энерге, киске, төнгө һүҙҙәре менән әйткәндә, ҡалай матур яңғырар ине!..

Бөтә халыҡ, миненсә, ваҡытты шулай билдәләй. Ә телевизор һәм радио аша һаман: "Өфө ваҡыты 22 сәғәт 45 минут", - тип ныҡышалар. Мин: "Өфө ваҡыты 15 минуттан төнгө 11" - тип, үҙемдекен тылҡыйым. Тик барыбер мине ишетмәйҙәр. Ишетмәһендәр. Минең сәғәтем барыбер матурыраҡ яңғырай. Һәр хәлдә - башҡортса.

# ДОКТОР, АУЫРЫЙЫМ...

Сәғит Агиштың "Р-һыҙ" Йософон иҫләйһегеҙме, Р өнөн әйтә алмаған ялсы малайҙы? Тәки килтереп сығара бит Р-ҙы, ныҡыша торғас!

- Крраснай Аррмияға берренсе итеп яҙ! - тип ауыҙҙарын яптырып ҡуя үҙенән көлгәндәрҙең.

Минең дә "Р-һыҙ" уҡыусым булды. Был хәрефте бөтөнләй әйтмәй ине. Бер йылды йәйге каникулға китмәҫ элек үҙе менән һөйләшеп алыр өсөн кабинетҡа алып индем. Өндө шулайтып әйтеп ҡара, былайтып сығарып ҡара, тип кәңәштәр бирҙем. Минең һүҙемде йыҡмаҫ өсөн генә, әммә килеп сыҡмай ул барыбер, тигән һымаҡыраҡ тыңлап ултырҙы малай.

- Егет булырһың, ҡыҙ һөйөрһөң, өйләнергә теләрһең. Ҡыҙҙың өйөнә барырһың. "Кәләш әйттерергә килдем", тип нисек әйтерһең һуң? Әйтеп өйрән йәйгеһен, йәме. Ошо һөйләмдәрҙе ҡабатла ла йөрө, - тип, бер бит ҡағыҙ биреп ҡайтарҙым.

Һөйләмдәрем ошолай ине:

- Доктор, дарыу бир, ауырыйым.

- Привет, брат!

- Закрой дверь, кудрявая дрянь!

- Дерелдәмә, япраҡ!

- Кәләш әйттерер кәрәк!

Был һөйләмдәрҙе мин ҡайҙан килтереп сығарҙым һуң? Һеңлемдең ҡыҙы ла Р-ҙы әйтә белмәне тәүҙә, Р булған бөтә урынға Д-ны ҡуйып әйтә ине. һыйыД, бәДәс, егеДме, тоДт, һ.б. Шулай өйрәнде Р-ҙы әйтергә. Шул иҫемә төштө лә, теге малайға Р урынына Д ҡуйып әйтеп йөрө мин яҙған һөйләмдәрҙе, тик Д-ны ҡаты итеп әйтмә, еңел итеп, инглиздәр һымаҡ, телеңдең осо менән һикертеп әйт, тинем. Өйрәнеп килде! Тоноғораҡ булһа ла Р-ҙы әйтеп өйрәнде.

Мин логопед түгел. Шулай ҙа, ошо һабаҡтың, бәлки, кәрәге тейер...

# ЙЫРСЫНЫ ТЫҢЛАП...

"Ай, Уралым, Уралым", тип матур ҡобайыр йырлай бер йырсы. Рәхмәт уға. Тик ҡапыл ошондай һүҙҙәр яңғырап, күңелдә ҡыра:

Ҡуйылыны ҡаймаҡтай,

Тәмлелеге һарыҡтай,

Һаба - һаба ҡымыҙы...

Ҡымыҙ һарыҡтай тәмле түгел, ҡымыҙ һарҡыттай тәмле. Һарҡыт - һарҡытыу, һарҡыу һүҙенән. Ҡоротто һарҡытаһың, эремсекте һарҡытаһың. Аҡ май бешкәндә айырылған шыйыҡ масса ла һарҡыт. Аҡ май һарҡытының төмән белгәс, мин уҡыҡан сағымда балаларға һарҡытның нимә икәнен бешелгән майға бөйләп аңлата торғайным. Уны майҙың айраны, тип тә әйтәбеҙ.

Ҡымыҙ төмән һарыҡ төмәнә сағыштырыуҙы бөтөнләй ҡабул итеп булмай. Бер китапта текста ла шулай яҙылғанды күреп, яңылыш хата киткәндер, тип төҙәтеп уҡыттым. Шул хата хәҙер йырсылар ауыҙынан яңғырай байтаҡтан бирле. Төҙәтһәләр ине...

# ҺОРАНЫРҒА ЯҘМАҺЫН...

Әсәйемдең йыш ҡабатлаған бер һүҙен ишетеп үҫтем бала саҡтан.

- Теләнсе итмә, Мәүләм! Кешенән бер йомош һорауы ла ҡыйын - битең һыуын биш түгер кәрәк...

Был аҡыл күңелгә һеңде. Тормош ҡағиҙәһенә әйләнде. Дөрөҫ теләктә Хоҙайым ишетеп, тормошҡа ашырып та ҡуя икәненә тағы бер тапҡыр инандым.

Уҡыу йортон тамамлап, Ишейҙә, туған мәктәбемдә эшләй башлағас, ғүмер буйы шул мәктәптә башланғыс синыфтарҙа эшләгән аҡыллы, тәжрибәле, алдынғы уҡытыусы Канищева-Гусева Раиса Илларионовнанан ошо рус халыҡ мәҡәлен ишеттем:

- Дай Бог дать, а не дай Бог брать.

Ике бөйөк халыҡтың тәрән аҡылы хәтеремдә йәшәй, кәрәк саҡта икеһен дә ҡулланам. Дөрөҫ теләк теләргә өйрәнеү өсөн һеҙ ҙә отоп алығыҙ, дуҫтарым.

**Таңһылыу ВӘЛИЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

### Һин - ун икенсе

Партияның көслө сағында булған был хәл. Бөрйән райкомының беренсе секретары Аллаяров Рәүеф Фазылйән улы бик һуңлап ҡына машинала йәйләүҙән ҡайтып килә икән. Соҡорло-саҡырлы урман юлынан көс-хәл менән оло юлға килеп сыҡҡан ул. Әммә күп тә бармаған, уны милиция хеҙмәткәре туҡтатҡан. Яңыраҡ ҡына эшлй башлаған йәш ГАИ-шник һәр машинаны туҡтатып, водителдәрҙең документтарын тикшереп тора икән. Юлдан арып ҡайтып килгән Аллаяров: "Һин, ҡустым, мине ҡабат туҡтатма. Мин бит Беренсе", - тигән. Уны танымаған, унан бигерәк уның әйткән һүҙҙәрен аңламаған йәш ГАИ-шник: "Юҡ, ағай, һин бөгөн беренсе түгел, ә ун икенсе", - тип яуаплаған.

### Изумруд

Түнәрәккә тороп алған ир-аттар кемделер дыу килеп тикшерә. Кемделер түгел, ә Изумруд исемле егетте тикшерәләр икән. "Изумруд шул мәлдә барып сыҡҡан, шунан Изумруд шулай тигән, тегеләр шулай тигән, ә Изумруд бер ҙә ҡаушап ҡалмаған..." - йәнле һөйләшеү ошо йүнәлештә бара. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, Изумруд бик шәп егеткә оҡшай. Әммә кем тураһында һүҙ бара - бына шуны аңлап булмай. Аптырағас, һорай ҡуям: "Ә кем һуң ул Изумруд?". Яуап ҡыҫҡа: "Алмаз".

Ирекһеҙҙән, көлөп ебәрәм. Алмаз исемле егеткә Изумруд ҡушаматы бик тапҡыр ҡушылған бит, әй. Алмаз ней, Изумруд ней, артыҡ айырма юҡ. Икеһе лә барыбер аҫыл таштар исемлегендә.




# БӨРЙӘН МӘҘӘКТӘРЕ

### Елочкин

Ауыл ерендә шулай бит инде. Берәй эш башлап та өлгөрмәйһең, шунда уҡ эргәңә башҡалар йыйыла башлай. Әле бына машинаны урамға этеп сығарып, ҡараштыра башлап та өлгөрмәнем, тәүгеләрҙән булып эргәмә күрше-күлән килә һалды. Торабара беҙҙең эргәгә ҡайҙалыр ашығып китеп барған бер нисә кеше туктала төштө. Беләме ул, белмәйме, быныһы ҡыҙыҡ түгел. Һәр кем ярҙам итергә тырыша, бына шунһы мөһим. Әле бына күрше әйтә: "Бына бынауыны бороп алыр өсөн 15-ле аҫкыс кәрәк". Икенсеһе өҫтәп ҡуя: "Ә бындай аҫҡыс Елочкинда ғына бар".

Хәл юҡ, киттем Елочкинға. Барып ингәндә, ул малына бесән һалып йөрөй ине. Бер аҙ һөйләшеп торғас, төп һорауға күстем: "Елочкин ағай, 15-ле аҫкыс кәрәк ине, машина ремонтлап йөрөйөм". Әйтеп тә өлгөрмәнем, Елочкиндың һөмһөрә күҙгә күренеп ҡойолдо. Минең һөйләп бөткәндә лә көтмәй, башын эйеп кенә гаражына инеп китте. Унда шалтыр-шолтор килтере, аҫкыс эҙләне. Шунан өндәшмәй генә минең ҡулға аҫкысты тоттороҙо ла, һарайы яғына китеп тә барҙы. Нимәгә ҡапыл ғына үсекте икән Елочкин - мин быны аңлай алмай, ҡайтып киттем.

Аҙаҡ аңлаттылар. Бәктиһәң, Елочкин уның фамилияһы түгел, ә ҡушаматы икән. Ҡушамат тағыу тарихы ошолайыраҡ булған. Бер мәл ҡүмәк кеше урманға эшкә барған. Шулай килеп сыҡҡандыр инде, ялан дағы йәш ҡар өҫтөнән иң беренсе булып беҙҙең герой атлап киткән. Ә ул, бәктиһәң, тарбайта баҫып атлай икән. Шуға күрә лә уның быйма эҙҙәре шыршы ботаҡтары һымаҡ тарбайып ятып ҡалған, имеш. Шаян телле халыҡҡа етә ҡалған. Шул арала уға Елочкин ҡушаматын тағып та ҡуйғандар.

### Сосина

Бер мәл бер йәш егет, урмандан буш ҡайтмайым, тип, машинаһына бер аҙ ҡарағай тейәп алып ҡайтырға булған. Һәйбәт ҡарағай түгел инде. Урманда булған буранан ҡалған ос-мос шунда. Барыбер ятып серейәсәк был ағас, тип, үҙен алдан уҡ аҡлап ҡуйған. Күп уйлап тормаған, тейәп алған да, ҡайтырға сыҡҡан. Ҡыуанысы оҙаҡҡа бармаған уның. Оло юлда милиция машинаһы ултыра икән. Егет машинаһын урман юлында туҡтатып, аптырауға ҡалған. Ни эшләргә? Шул мәл ул кабинала ҡыҫтырыулы торған урман билетын күреп ҡалған. Асып ҡараһа, был рөхсәт ҡағыҙ уҫаҡҡа алынған икән. Шунан егеттең башына бик елле уй килгән - ул һәр "осина" һүҙенең башына "с" хәрефе өҫтәп сыҡҡан. Шунан инде тыныс күңел менән оло юлға килеп сыҡҡан. Әлбиттә, уны шунда уҡ милиция хеҙмәткәрҙәре туҡтатҡан. Йәшерәге тейәлгән ҡарағайҙы тикшереп төшкән, ә өлкәнерәге "ҡарағайға" бирелгән рөхсәт ҡағыҙына оҙаҡ теклəп торған. Ахырҙа һорау биргән: "Ә нишләп билетка сосна тип түгел, ә сосина тип яҙылған". Егет, аптыраған кеше булып: "Белмәйем тағы, бәлки, сосна, тип яҙабыҙ тип, яңылыштан ғына, сосина, тип яҙғандарҙыр", - тип яуырындарын һикерткән. "Ахырыһы, шулайҙыр", - тип килешкән булған уның менән хәлде төшөнгән тикшереүселәр.

Тапҡырлығына ҡыуанған егет юлын дауам иткән. Әммә машина ҡуҙғалыу менән уға Сосина ҡушаматы бергә йәбешеп тә киткән.

**Әхмәт СИРБАЕВ.**

✓ *Халҡыбыҙҙың боронғо кәсебенә Батыр Басир улы ғүмере буйына тоғро булып ҡалды. Бөгөн уның солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүенә 40 йылдан ашыу ваҡыт үтеп киткән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТОҘ УРЫНЫНА - ӘСЕ БОРОС

■ Бирмингем университеты белгестәре составында D витамины булған оҫтөмәләр янған тиренең бөтәшеүенә ыңғай йоғонто яһай, тип белдерә. Бынан тыш, D витамины инфекциялар үҫешен дә тотҡарлай. Ғалимдар бер йыл дауамында үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тире яныу осрағынан һуң кешегә шунда уҡ D витамины бирһәң, уның тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бар.

■ Эргә-тирәндәге кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә булыу яңғыҙлыҡтан ҡотҡарып ҡына ҡалмай, ә баш мейеһе эшмәкәрлегенә лә ыңғай йоғонто яһай. Тикшеренеүҙәрҙә 80 йәште үткән ҡарттар ҡатнашҡан. Ғалимдар уларҙың психологик торошон, шулай уҡ башҡалар менән нисек аралашыуын күҙәткән. 50-60 йәштәгеләрҙеке кеүек когнитив һәләттәре юғары булғандарҙың барыһы ла үҙен уратып алған кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә икәнлеге асыҡланған.

■ Әсе борос һәм башҡа ҡырҡыу тәмле ризыҡтар майҙы яндыра. Ҡытай ғалимдары билдәләүенсә, әсе борос составындағы капсаицин матдәһе тоҙло ризыҡ ашағы килеүҙе лә туҡтата икән. Был, үҙ сиратында, йөрәк һәм ҡан тамырҙары проблемаларын булдырмай. Белгестәр 600 кешене тикшергән. Был ваҡытта улар ҡырҡыу тәмле ризыҡҡа өҫтөнлөк биргән. Һөҙөмтәлә, улар тоҙҙо аҙыраҡ ҡуллана башлай, шул сәбәпле юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларҙың хәле яҡшыра. Ғалимдар быны әсе ризыҡтың тоҙ тәмен көсәйтеүе менән аңлата. Баш мейеһендә әсе һәм тоҙло тәм үҙәктәре бер ерҙә урынлашҡан һәм бер-береһен бер аҙ ҡаплап тора. Әсе тәм үҙәге әүҙемләшкән мәлдә тоҙло тәмде танаусы күҙәнәктәр шулай уҡ "тоҡана". Шуға ла ҡабул иткән ризыҡ беҙгә тоҙлораҡ тойола. Был өлкәлә тикшеренеүҙәр дауам итә.

■ Бер үҙең ултырып ашау дөрөҫ түгел, ти Көньяҡ Корея белгестәре. Был метаболик синдром үҫешенә килтереүе ихтимал. Метаболик синдром - йөрәк сирҙәренән, инсульт һәм диабеттан торған тайпылыштар комплексы. Ул бил тирәһенә май ултырыуҙан, ҡан баҫымы, ҡанда шәкәр, холестерин күләме күтәрелеүҙән ғибәрәт. Етмәһә, яңғыҙ ашағанда кеше ризыҡты күберәк ҡабул итә, был һимереүгә килтерә. Ир-егеттәр араһында метаболик сидром йышыраҡ күҙәтелә.

■ Өлкәнәйә барған һайын, кешенең мускул массаһы кәмей. АҠШ-ның Айова университеты ғалимдары был күңелһеҙ күренештең сәбәбен асыҡлаған. Америка ғалимдары мускул көсһөҙлөгөнә килтергән аҡһым өлгөнөн тапҡан. ATF4 аҡһымы мускул аҡһымы синтезын ҡыҫҡартып, һөлдә мускулдары генына тәьҫир итә. Белгестәр ATF4 әүҙемлеген баҫыусы ике тәбиғи компоненты асыҡлаған - уларҙың береһе алмала, икенсеһе йәшел помидорҙа. "Карт кешеләр мускулдарҙың көсһөҙлөгө менән яфалана. Алмалағы урсол кислотаһы менән йәшел помидорҙағы томатидин был процесты туҡтатып тора ала", - ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Кристофер Адамс.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Баш ауыртыуы бөгөн ғәҙәти күренешкә әйләнгән, тиергә лә мөмкин. Быны көсөргәнешкә, һауа торошо үҙгәреүгә, ҡояш йәки ай тотолоуға һ.б. сәбәптәргә бәйләргә күнеккәнбеҙ. Тиҙ генә ауыртыуҙы баҫыусы дарыуҙар ашайбыҙ ҙа, тағы ла донъя мәшәҡәттәренә сумабыҙ. Әммә ябай баш ауыртыуы булып күренгән билдәләрҙең сәләмәтлек өсөн кире эҙемтәләргә килтереүсе мәкерле сирҙәрҙең башланғыс стадияһы хаҡында организмдың беҙгә хәбәр итергә тырышыуы ла булыуы ихтималлығын уйлап та ҡарамайбыҙ. Баш ауыртыуының нилектән барлыҡҡа килеүе, баш мейеһенең ҡан тамырҙары зарарланыуы, уларҙың эҙемтәләре хаҡында Башҡорт дәүләт медицина университетының Йәмғиәт сәләмәтлеге һәм һаулыҡ һаҡлауҙы ойоштороу кафедраһы доценты Азамат РӘХИМҠОЛОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# ОРГАНИЗМДЫҢ ИҪКӘРТЕҮЕНӘ...



## ҡолаҡ һалырға кәрәк

**➔ Азамат Салауат улы, бөгөн баш мейеһенең ҡан тамырҙары зарарланыуы һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге иң көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып тора, тиҙәр. Был, ысынлап та, шулаймы?**

- Үҫешкән илдәрҙә вафат булыусыларҙың дөйөм һанының 12,5 - 14 проценты ошоға бәйле сирҙәргә тура килә. Рәсәйҙә һәм Америкала инсульттан яҡты донъя менән хушлашыусылар статистикаһы өсөнсө урынды биләй, Германияла - икенсе, Японияла - беренсе. Бик йыш, хатта 50 процентҡа тиклем, инсульттың киҫкен осоронда вафат булалар, ни бары 20 процент ҡына һуңынан хеҙмәткә яраҡлы булып ҡала. Былдай күңелһеҙ һандар баш мейеһенең ҡан әйләнеше үҙенсәлектәре һәм уның метаболизмына бәйле. Йәғни, мейе резерв булдыра, туҡлыҡлы матдәләрҙе һуңынан ҡулланыу өсөн туплап һалып ҡуя алмай һәм шунлыҡтан уларға даими ихтыяж кисерә. Билдәле булыуынса, сәләмәт кешенең 100 г мейе матдәһе аша минутына 54 мл ҡан аға, ә церебраль ҡан әйләнеше минутына 700-1000 миллилитрға етә. Мейе 100 грамға 3,3 мл кислород һәм 5,4 мл глюкоза сарыф итә, был миокард менән сағыштырғанда - 5, мускулдарға ҡарағанда 20 тапҡырға күберәк. Мейегә дөйөм организм талап иткән кислородтың 20 проценты кәрәк.

**➔ Бөгөн барлыҡ ауырыуҙарҙың йәшәреүе күҙәтелә. Мейе тамырҙары эшмәкәрлегенең боҙолоуы ниндәй категория өсөн бигерәк тә хәүефле?**

- Ысынлап та, был күренеш ололар араһында ғына түгел, йәштәр араһында ла киң таралған. Статистика буйынса, мейеләгә ҡан әйләнеше боҙолоуҙан халыҡтың 75 проценты самаһы яфалана. Медиктар быны тормош рәүешенә - гиподинамияға (аҙ хәрәкәтләнеү) һәм сәләмәтлеккә зыянлы ризыҡ ҡулланыуға бәйләй. Мейенең бик күп сирҙәренең башланған ваҡытта асыҡ симптомдары булмай, шуға күрә уларҙы арығанлыҡҡа, стресҡа, көн боҙолоуға яһаралар һәм табипҡа күренергә ашыҡмайҙар. Ә уларҙың баш мейеһенең бик йыш күҙәтелгән аневризма, атеросклероз, мигрень, баш һөйәге эсендәге гипертензияға, мальформация, мейеләгә ҡан әйләнешенең ваҡытлыса боҙолоуы, дисциркулятор энцефалопатия, инсульт кеүек сирҙәргә килтереүе мөмкин.

**➔ Ошо сирҙәрҙең һәр ҡайһыһына ентекләберәк туҡталып, уларҙың төп симптомдары хаҡында ла һөйләп үтегеҙ әле.**

- Баш мейеһе ҡан тамырҙарының аневризмаһы - иң мәкерле сирҙәрҙең береһе, сөнки үҙенең һығылмалылығын юғалтҡан тамыр теләһә ҡайһы ваҡытта шартлап, мейегә ҡан һауыуы мөмкин. Ауырыуҙың төп сәбәбе булып артерияның, ҡайны бер осраҡта венаның тыуымыштан булған йәки һуңынан барлыҡҡа килгән дефекты һәм ул шартлағанға тиклем үҙен бер нисек тә һиҙҙермәй. Ҡан тамыры шартлаған осраҡта сирленең ғүмерен күпселек осраҡта һаҡлап алып ҡалып булмай, шуның өсөн уны алдан диагностикалау яҡшы. Патология шунда уҡ үҙен һиҙҙермәй, яйлап беленә башлай. Баш ауырта, хәлһеҙлек барлыҡҡа килә, күңел болғана, тауыш һәм яҡтылыҡ кире йоғонто яһай, ишетеү һәләте һәм телмәр боҙола, тән ойой, ниндәйҙер өлөштә сәнсеү, тулы булмаған фалиж барлыҡҡа килә, күҙ алды ҡараңғылана, күҙ ҡылыйлана, күҙ ҡабағы һәләнеп төшә. Былдай симптомдар күҙәтелгәндә кисекмәҫтән табипҡа - терапевтҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Атеросклероз - баш мейеһе артерияларында холестерин төйөрсәләре барлыҡҡа килеүе. Улар ҡан тамырҙарын өлөшләтә йәки тулыһынса ҡаплай,

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# СОЛОҠСО БУЛҒАН БАБАҺЫ,

## солоҡсо бөгөн балаһы



**Башҡорт халҡының боронғо шөғөлө солоҡсолоҡта оҫта булып танылған уңған-тырыштар араһында, һис шикһеҙ, Бөрйән районының Ғәлиәкбәр ауылында көн күргән Толомғужин Батыр Басир улы лайыҡлы урын алып тора.**

Шуныһы иғтибарға лайыҡ, Толомғужиндарҙың урман бал ҡорттары менән шөғөлләнеүе тәрән быуаттар төпкөлөнә барып тоташа. Заманында Батырҙың атаһы Басир Үрге Нөгөш - Ғәлиәкбәр ауылдары тирәһендә иң көслө солоҡсо булып иҫәпләнгән. Уның бер үҙенең генә 150-нән ашыу ҡортло солоғо булған. Бөгөнгө күҙлектән сығып уйлап ҡараһаң, иҫ китмәле! Ә инде Басирҙың атаһы Ғәле - 60 самаһы, ә Ғәленең атаһы Ҡунаҡбай 64 солоҡ тотҡан. Үҙ сиратында Басир ҙа атай-олатайҙар йәҙәнә ҡыҙыллыҡ килтермәй. Ваҡытында уның күсле солоҡтар һаны 60-тан ашып китә. Халҡыбыҙҙың боронғо кәсебенә Батыр Басир улы ғүмере буйына тоғро булып ҡалды. Бөгөн уның солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүенә 40 йылдан ашыу ваҡыт үтеп киткән. Тәжрибәле солоҡсо бар ғүмерен Шүлгән-Таш ҡурсаулығы менән бәйләне. Ул үҙенә беркетелгән ҡурсаулыҡ биләмәһендә ҡүстәр һанын 20-нән кәметмәҫкә тырышты.

Ә инде Батыр Басир улының халҡыбыҙҙың боронғо шөғөлөн үҙ балаларына, йәғни киләһе быуынға тапшыра алыуы айырым хөрмәткә лайыҡ. Күрше Ишембай ҡыҙы Әлмира менән ғаилә ҡороп ебәргән был ғаилә 5 балаға - дүрт малайға һәм бер ҡыҙға ғүмер бүләк итә. Бөгөн улдары Салауат та, Урал да, Илшат та, Илфат та, хатта кейәүҙәре Илфат менән ҡыҙҙары Нурсилә лә солоҡсолоҡ менән шөғөлләнә. Бөгөн был ғаилә солоҡҡа бәйле барлыҡ ярыштарҙа ла ҡатнашып, үҙҙәренең оҫталыҡтарын күрһәтәләр.

✓ "Рәхмәт" - ул иң яҡшы һүҙҙәрҙең береһе. Кешенең һиңә ҡылған изгелегенә яуабың, уның менән риза булыуың. Тик "Аллаһ риза булһын", "Аллаһтың рәхмәте яуһын" тип әйтһәң, был инде - кешегә доға ҡылыу була.



һөҙөмтәлә кислород аслығы барлыҡҡа килә. Был сирҙең дә симптомдары шунда уҡ күренмәй, шуға табипҡа бик һуң, тромбтар барлыҡҡа килгәс, баш мейеһе ҡабығының ҡайһы бер участкалары үлгәс, киста йәки йөй барлыҡҡа килгәс, мейе эшмәкәрлеге боҙолғас ҡына мөрәжәғәт итәләр. Ҡағиҙә булараҡ, атеросклероз менән оло йәштәгеләр яфалана. Уның симптомдары: баш ауырта, ҡолаҡ шаулай, кеше тиҙ ҡуҙғый, иғтибар туплау ауырлаша, йоҡо насарлана, күңел төшә, иҫ юғала, аҡыл эшмәкәрлеге, ғөмүмән, интеллект түбәнәйә.

Мигрень булғанда көслө баш өйәнәге күҙәтелә, сөнки ваҡ тамырҙар ҡыҫыла (спазма). Өйәнәк ярты сәғәттән алып бер нисә көнгә тиклем һуҙылыуы ихтимал һәм уны ауыртыуҙы баҫа торған ябай дарыуҙар менән туҡтатыу мөмкин түгел. Мигрень ваҡытында, ғәҙәттә, баш бер яҡтан ауырта, күңел болғана, ҡоҫтора, тауыш һәм яҡтылыҡ ныҡ ҡамасаулай. Дауаланыу өсөн махсус препараттар ҡулланыла, улар һәр кемгә айырым тәғәйенләнә. Ҡайһы бер осраҡта хатта бер нисә препаратты бер юлы ҡулланыу урынлы. Мигрень өйәнәге тиҙерәк үтһен тиһәгеҙ, ҡыбырламай ғына ҡараңғы, тыныс бүлмәлә ятырға кәрәк.

Баш һөйәге эсендәге баҫым (внутричерепная гипертензия) етди сир тураһында һөйләй. Был баш мейеһендә ҡан һауыуҙан барлыҡҡа килгән шеш (гематома) йәки тиҙ үҫеүсе башҡа шеш булыуы мөмкин. Уның төп симптомдары: иртән һәм төнөн баш ауыртыу, тән тиреһенең күгәреп тороуы, тамырҙарҙың асыҡ күренеп тороуы, иртән күңел болғаныу һәм ҡоҫтороу, ҡан баҫымының юғары булыуы, һауа торошона һиҙгерлек.

Үҫеш кәмселеге (мальформация) - тамырҙарҙың яңылыш тоташыуы һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙары системаһының төҙөлөшө боҙолоуын ҡылыҡһырлаусы тыумыштан килгән сир. Патологияның мөмкин булған үҫеш сәбәптәре араһында медиктар генетиканы, йөклөлөк ваҡытында яралғының йәрәхәтләнеүен билдәләй.

Мейеләге ҡан әйләнешенең ваҡытлыса боҙолоуы ҡапыл барлыҡҡа килә һәм тиҙ үтә. Бындай күренештәрҙең төп сәбәбе - ваҡ тамырҙарҙан ҡан һауыу, төп тамырҙың ҡыҫылыуы, башланып торған тромбоз, микроэмболия (артериаль тамырҙарҙың бик бәләкәй эмбол менән тығылыуы). Был ваҡытлыса күренеш бер нисә минуттан алып бер нисә сәғәткә һуҙылырға мөмкин, һуңынан тамырҙарҙың функцияһы тулыһынса тергеҙелә. Уның билдәләре ниндәй тамырҙарҙың эшмәкәрлеге боҙолоуға ҡарап, төрлөсә була: йоҡо артерияһында булһа - күңел болғана, баш әйләнә, хәтер юғала; күҙҙең артериялары айырылған эске йоҡо артерияларында булһа - күреү һәләте насарая, күҙ һуҡырая; вертебраль-базиляр өлкәлә - баш шаулай, баш әйләнә, тик торғанда тигеҙлек юғала, күҙ ҡабаҡтары ирекһеҙ хәрәкәтләнә.

Дисциркулятор энцефалопатия - мейе төҙөлөшөндә артыҡ үҙгәрештәргә килтермәгән, әммә туҡланыу процесының үҙгәреүе менән аңлатылған баш мейеһе ауырыуының дөйөм атамаһы. Бала саҡта интеллект һәм зиһендең тарҡалыуына килтерә һәм ҡайһы бер осраҡта быумаға оҡшаш төҫ ала. Сир үҫешеүҙең төп сәбәптәре булып юғары артериаль ҡан баҫымы һәм атеросклероз тора. Энцефалопатияға остеохондроз сәбәпсе булыуы ла мөмкин. Был осраҡта инде деформацияланған умыртҡалыҡ дискылары мейене ҡан менән тәьмин итеүсе артерияларҙы ҡыҫа. Сирҙең төп билдәләре неврология өлкәһенә ҡарай. Тәүҙә кеше ярһыусанға әйләнә, хәлһеҙлек тоя, насар йоҡлай. Ҡайһы ваҡыт депрессияға бирелә. Артабан инде эгоцентризм кеүек һыҙаттар күренә башлай, сирле бер сәбәпһеҙгә ҡуҙғый, үҙен ғәҙәти булмағанса тота. Һуңынан саманан тыш ярһыулыҡ апатия менән алмашына. Бынан тыш, кешене бик йыш баш ауыртыу борсой, телмәре боҙолоуы мөмкин. Сирҙе ваҡытында дауаламағанда организмда кире ҡайтарып булмаҫлыҡ процестар башланыуы ихтимал, йәғни дисциркулятор энцефалопатия инсультҡа һәм эпилепсияға килтереүе мөмкин. Патологияны ваҡытында асыҡлап, дауалағанда, ауыр эҙемтәләрҙе иҫкәртергә була.

Инсульт - инвалидлыҡҡа һәм үлемгә килтереүсе киң таралған сир. Ул баш мейеһендәге ҡан әйләнешенең киҫкен боҙолоуы менән ҡылыҡһырлана. Инсульттың ике төрө бар - ишемик һәм геморрагик. Беренсе осраҡта артерия тығыла йәки ҡыҫыла (тарая), икенсеһендә - тамыр шартлап, мейегә ҡан һауа.

Ишемик инсульт киң таралған (барлыҡ осраҡтарҙың 80 проценты) һәм уға 60 йәштән өлкәндәр дусар була. Ғәҙәттә, миокард инфаркты, шәкәр диабеты, йөрәк ритмының боҙолоуы, йөрәктең ревматик етешһеҙлеге һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Уның үҫешенә артерияларҙың патологияһы һәм ҡан ағышының боҙолоуы йоғонто яһай.

Геморрагик инсульт һирәк осрай, әммә ул хәүефлерәк. Нигеҙҙә, 45-60 йәшлектәрҙә йыш күҙәтелә. Артериаль ҡан баҫымы юғары булыусыларҙа (85 процент самаһы осраҡта) һәм атеросклероз сирлеләрҙә үҫешә. Инсультты дөйөм беш мейеһе һәм айырым урындағы неврология симптомдары аша белергә була.

Дөйөм баш мейеһе сире билдәләренә йоҡо килеү йәки, киреһенсә, саманан артыҡ ярһыу; ҡыҫҡа ваҡытҡа аң юғалтыу; шаңҡыу тойғоһо, көслө, күңел болғандырған баш ауыртыуы, баш әйләнеү, киңлектә һәм ваҡытта йүнәлеш юғалтыу, тирләү, ауыҙ кибеү, янып барыу, йөрәк ҡағыуы инә.

Айырым урындағы билдәләр мейенең ҡайһы өлөшө зарарланыуына бәйле. Әгәр хәрәкәт өсөн яуап биреүсе өлөш зарарланһа, хәлһеҙлек барлыҡҡа килә, һиҙгерлек юғала, уң йәки һул яҡ аяҡ-ҡулды фалиж һуға. Телмәр ауырлаша, бер күҙ насар күрә башлай, тура ғына атлап булмай, кеше тигеҙлекте юғалта. Мейеләге ҡан әйләнеше боҙолоуҙың билдәләре күренеү менән киҫекмәҫтән тиҙ ярҙам саҡыртырға кәрәк, сөнки инсульт ваҡытында һәр минут ҡәҙерле.

**➔ Ошо һөйләгәндәрҙән сығып, гәзит уҡыусыларға ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

- Мейенең ҡан тамырҙары ауырыуҙарын дауалауға ҡарағанда, уларҙы булдырмау еңелерәк. Шуға күрә, организмығыҙҙың сигналдарына ҡолаҡ һалырға кәрәк. Хәл-торошоғоҙҙа үҙгәрештәр тойһағыҙ, шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итеү зарур. Ҡан тамырҙары патологияларын иртә стадияла дауалау мөмкин, ә инде ваҡытты ҡулдан ысҡындырғанда, эҙемтәләр ҡыуандырмай. Шуға ла медиктар профилактик эштәргә ҙур иғтибар бүлеп, сәләмәт тормош рәүешен алып барырға, дөрөҫ туҡланырға, насар ғәҙәттәрҙән баш тартырға тәҡдим итә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Һүҙ биргәнһең икән - үтә!

Мотивация буйынса теләһә ниндәй психолог йәки белгес "үҙенә ышаныу"ҙың кешегә ни тиклем мөһимлеге тураһында әйтер. Быға нигеҙ ҙә бар. Шуға ҡарамаҫтан, үҙеңә ышанғанға тиклем, үҙеңә ышанырға өйрәнергә кәрәк.

Күптәр әйткән һүҙе алдында көсһөҙ: нимәлер вәғәҙә итә, әммә үтәмәй. Ярҙам итергә һүҙ бирәләр ҙә, балыҡҡа сығып китәләр һ.б. Һуңынан тормоштарында ни өсөн барыһы ла кирегә киткәнен аңламайҙар.

Әйткәнеңде үтәү мөмкинлегең булғанда ғына һүҙ бир. Әгәр вәғәҙәһеҙ йәшәй алмайһың икән, аҙыраҡ һәм һирәгерәк вәғәҙә бир, әйткәнһең икән - мотлаҡ үтә. Тиҙҙән бындай вәғәҙәң үҙең өсөн ҡанунға әүерелер һәм бары тик шунда ғына, үҙемә ышанам, тип әйтә алаcаҡһың.

## Ҡыйыулыҡ

*Уңайлылыҡ беҙгә ялсы булып килә,*
*хужа булып ҡала.*
*Хәлил Джибран.*

Кешеләр ямғыр аҫтында бейеү тураһында йырҙар яҙа, ысынбарлыҡта ҡойма ямғырға эләкһәләр, илаулай башлайҙар. Индиана Джонстың ер аҫты юлдарында тубыҡтан йыландар һәм үрмәкселәр кисеп йөрөгәнен ҡарарға яраталар, ә офиста кондиционер ваталһа, шунда уҡ истерикаға биреләләр. Бәлки, көндәлек тормошта ҡыҙыҡлы мажаралар эҙләй башлау өсөн уларҙы телевизорҙан һирәгерәк ҡарарға кәрәктер?

Беҙ "уңайлыҡ" төшөнсәһенә артыҡ ҙур әһәмиәт бирәбеҙ. Бында финанс уңайлығы тураһында ғына түгел, хәл-торош уңайлығы тураһында һүҙ йөрөтәм. Беҙ, уңайлыҡты наркотик кеүек күреп, үҙебеҙҙе стресҡа индербеҙ. Йәнәһе лә, самолеттар - расписание буйынса осорға, эш - еңел, кредиттар буйынса проценттар түбән булырға тейеш.

Тормош ни тиклем уңайлы, ул шул тиклем күңелһеҙ. Беҙҙең ундай тормоштан мейеләр әсей. Тормошоң нисек булырға һәм унда үҙеңде нисек тойорға тейешлегең тураһында ҡағиҙәләрҙе әҙерәк уйлап тапҡан һайын, уның сюрприздарын ҡабул итеү еңелерәк.

Хыялға табан барғанда уңайһыҙ хәл-торош етерлек буласаҡ - бәхәстәр ҙә, тәнҡит тә, ярлылыҡ та, арығанлыҡ та. Әммә теләһә ниндәй күңелһеҙлекте дөйөм процестың бер өлөш тип ҡабул итергә кәрәк. Аптыра. Һоҡлан. Тормошҡа ҡыуан. Тирә-яҡта барыһы ла насар булып тойолғанда ла донъяға шатланып баҡ.

Уңайлыҡ тураһында тағы нимә әйтергә мөмкин? Моғайын, иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: кешеләге ҡыйыулыҡты тормош аҡылға ҡарағанда нығыраҡ бүләкләй. Ҡыҫҡаһы, ҡыйыулыҡ - ул ҡурҡыу булмауҙы аңлатмай, ҡыйыулыҡ - ул ҡурҡыу булғанда ла нимәлер эшләү. Йәшәүен тормош ағышына ҡуйыусыларҙың да, даими хәүефкә барыусыларҙаң да ҡурҡыуы бер үк. Әммә тәүгеләре ваҡ-төйәктән ҡурҡа. Ә ни өсөн ҙурыраҡ нәмәнен ҡурҡмаҫҡа?

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

Егәрле солоҡсо Рәсәйҙең "Фиҙакәр хеҙмәт өсөн" һәм "Бөтә Союз Халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә ҡатнашҡаны өсөн" миҙалдары, Рәсәй Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығының юғары билдәһе - "Ҡурсаулыҡтар эшендә уңышлы хеҙмәте өсөн" билдәһе менән бүләкләнгән. Ә шулай ҙа Батыр һәм Әлмирә Толомғужиндар өсөн иң юғары маҡтау - уларҙың бала-ейәнсәрҙәренең һөйөүе, олатай-өләсәй менән ғорурланыуы. Бына уларҙың ейәнсәре Наҙгөл олатаһына ошондай шиғыр бүләк иткән.

## Олатайыма

*Солоҡсо - ул алтын ҡуллы,*
*Батырҙыр олатайым.*
*Ниңә һоҡланғанымды,*
*Һеҙгә лә аңлатайым.*

*Ҡорттарына солоҡ юна,*
*Балына батман эшләй.*
*Ятраҡан эше булғанға,*
*Шөғөлө лә бик оҡшай.*

*Бал ҡорттары кеүек эшсән,*
*Электән ата-бабам.*
*Олатай менән ҡорт ҡарап,*
*Үҙемә көс-дәрт алам.*

Бәлки, был ябай ғына шиғыр юлдары ул хәтлем үк камил да түгелдер. Әммә бала күңеленән сыҡҡан ошо ябай ғына һүҙҙәрҙә барлыҡ һөйөү-ғорурланыу урын тапҡан. Олатай-өләсәй өсөн бынан да юғарыраҡ шатлыҡ юҡтыр ул.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**"Рәхмәт" тигән бик матур һүҙ бар телебеҙҙә. Ул беҙгә ғәрәп теленән Ислам дине менән бергә килеп ингән.**

Уға тиклем башҡорттар бер-береһенә булған рәхмәтте яҡшы теләктәр аша белдерер булған. Мәҫәлән, иҫән йөрө, имен-аман бул, мул йәшә, бай бул... Ислам динен ҡабул иткәс, кешеләр бер-береһенә "Аллаһтың рәхмәте төшһөн" тип теләй башлаған. "Рәхмәт" һүҙе "ниғмәт" тигәнде аңлата (русса "милость"). Мосолмандар осрашҡанда һәм хушлашҡанда бер-береһенә "Әссәләмү ғәләйкүм үә рәхмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ" тип сәләм бирә. Йәғни "Һеҙгә тыныслыҡ һәм Аллаһтың ниғмәте һәм бәрәкәте булһын"("сәләм" һүҙе лә "әссәләмәғәләйкүм"дән ҡыҫҡартып алынған - "тыныслыҡ". Әйткәндәй, урыҫтың "спасибо"һы ла Аллаһ менән бәйле: "спаси Бог" ("Аллаһ ҡотҡарһын").

Тимәк, "рәхмәт" - ул тамамланмаған теләк. Элек бер танышым йыш ҡына "рәхмәт" урынына шаяртып "рәхмәтуллаһ" ти ине. Ә бит ул үҙе лә аңламаҫтан дөрөҫтө әйткән. Иҫләйем, беҙ бәләкәй саҡта өлкәндәр күберәк "Рәхмәт төшкөрө", "Алланың рәхмәттәре яуһын", "Аллаһы Тәғәлә риза булһын", "Фәрештәләр ташламаһын" кеүек теләктәр әйтә ине. Эй шул саҡта күңелгә бигерәк рәхәт була торғайны. Эйе, "рәхмәт" - ул иң яҡшы һүҙҙәрҙең береһе. Кешенең һиңә ҡылған изгелегенә яуабың, уның менән риза булыуың. Тик "Аллаһ риза булһын", "Аллаһтың рәхмәте яуһын" тип әйтһәң, был инде - кешегә доға ҡылыу була. Ә доғаны Аллаһы Тәғәлә ишетә, ихлас булғандарын ҡабул итеп, һорағаныңды биреп тә ҡуя. Шуға күрә бер-беребеҙгә изге доғала булайыҡ, милләттәштәр, тип әйтке килә.

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

✓ *Ҡәйнә менән килендең мөнәсәбәтендә ир кеше мөһим урын биләй. Ир кеше әсәһен дә, ҡатынын да берҙәй ихтирам итһә, ҡәйнә менән килен араһындағы мөнәсәбәт тә яҡшы була.*



ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ

# ҒАИЛӘ БӨТӨНЛӨГӨ...

## ҡәйнә менән килен татыулығында ла

**Әбйәлил районының Амангилде ауылында үткән "Ҡәйнә менән килен мөнәсәбәтенең йәш ғаиләне һаҡлап ҡалыуҙағы роле, бала тәрбиәләүҙә сағылышы" тип аталған ҡорға ошо биләмәгә ҡараған ауылдарҙан ағинәйҙәр, ҡәйнәләр һәм килендәр йыйылды. Был йыйында шулай уҡ "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Өфө ҡала округы хакимиәте Мәғариф идаралығының тел сәйәсәте бүлеге етәксеһе, шағирә Зөлфиә Ханнанова, район ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Роза Таһирова ҡатнашты.**

Амангилде ауыл биләмәһе башлығы Марат Фәхрисламов сараны асып, йыйылыусыларҙы тәбрикләне һәм урындағы хакимиәттең ағинәйҙәр ҡоро кеүек йәмәғәт ойошмаларына, уларҙың тәжрибәләренә таянып эшләүен әйтеп, был хәлдең эскелек, наркоманлыҡ кеүек кире күренештәргә ҡаршы көрәштә ыңғай һөҙөмтә биреүен дә билдәләне. Артабан ҡор дилбегәһен Амангилде ауыл биләмәһе ағинәйҙәре етәксеһе Ләлә Ғүмәрова үҙ ҡулына алды. "Ҡәйнә менән килен татыу булғанда, уларҙың донъялары ла яҡты, балалар тәрбиәләү ҙә бер төптән, бер һүҙҙән. Шуның өсөн ыңғай һөҙөмтәһе лә күҙ алдында, - тине Ләлә Мөхәрләм ҡыҙы. - Бөгөн йәштәр араһында эскелек, тәмәке тартыу, наркоманлыҡ күренештәренең ауылдарҙа ла таралa барыуы һәр беребеҙҙе борсой, үҫеп килеүсе ейәндәребеҙҙе ошондай насар ғәҙәттәрҙән аралап ҡалыуҙа, шулай уҡ тыуған телебеҙгә һөйөү уятыуҙа атай-әсәй менән бер рәттән, өләсәй-олатайҙар тәрбиәһе лә мөһим роль уйнай. Бала күңеле - аҡ ҡағыҙ, барыһын да һеңдереп үҫә, шуға күрә, сабый саҡтан ғаиләләге үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттә тәрбиәләнгән ҡыҙҙар-малайҙар һәр яҡтан тәртипле, кешелекле, кеселекле, изге күңелле була. Ҡәйнә менән килендең берҙәм тәрбиәһенән сабыйҙа тик изгелек орлоҡтары шытым бирә. Тәрбиә нигеҙе - ғаиләлә, ояһында ни күрһә, осҡанында шул була, тип юҡҡа әйтмәгән бит халыҡ".

Артабан Ләлә Мөхәрләм ҡыҙы ошондай матур мөнәсәбәттәр өлгөһө булып торған ҡәйнә һәм килендәрҙе исемләп атаны, уларҙың был ҡорҙа ҡатнашыуын билдәләп үтте. Бына улар: Үтәгәндән - Нәзифә менән Зәкирә Ялмырҙиналар, Сәриә менән Гөлфирә Йәһүҙиналар, Амангилдегән - Зәбирә менән Һылыу Шакировалар, Зөһрә менән Люциә Дәүләтшиналар, Гәшүрә менән Луиза Әүбәкеровалар, Хәтирә менән Фәниә Ҡужәхмәтовалар, Ләлә менән Зилиә Ғүмәровалар, Нәфисә менән Минзәлә Низамовалар, Әбделгәзендән - Флүрә менән Гөлназ Килдейәровалар, Рысҡужанан - Зилдә менән Земфира Зәйнуллиналар, Фатима менән Айгөл Һибәтовалар.

Ҡорҙа сығыш яһаусы һәр кемдең аҡылын аҡ ҡағыҙға теркәп, ғаиләләргә ҡағиҙә рәүешендә тәҡдим итеп булыр ине. Бына, мәҫәлән, Сәрбиямал Ихсанова үҙенең сығышында Ҡаҙмаш ауылындағы өлгөлө килен-ҡәйнәләр хаҡында һөйләне: "Электән ҡәйнә, килен бер ғаилә булып көн күргән. Бөгөн күптәр, башҡаның башы ауырымай, тип, улына кәләш алып биреү менән башҡа сығарыу яғын ҡарай. Ә беҙҙең ауылда ҡайны-ҡәйнәһе менән матур итеп йәшәгән килендәр күп кенә. Мәҫәлән, Фатима Атауллина Айгөл киленен үҙ өлгөһөндә тәрбиәләп алды. Биш бала үҫтергән Айгөл бөгөн үҙе өләсәй булһа ла, һәр эштә ҡәйнәһе, әсәһе менән кәңәш итә. Йәш килен Гөлнур ҡәйнәһе Орҡоя Әнелованың һүҙенән сыҡмай, уның балаларының мәктәптә яҡшы уҡыуы, итәғәтле булыуы өләсәй тәрбиәһенән килә". Сәрбиямал апай фекеренсә, ҡәйнә менән килендең мөнәсәбәтендә ир кеше мөһим урын биләй. Ир кеше әсәһен дә, ҡатынын да берҙәй ихтирам итһә, ҡәйнә менән килен араһындағы мөнәсәбәт тә яҡшы була.

Ун ете йәшенән килен булып төшкән Нәзифә апай Ялмырҙина 34 йыл ҡәйнәһе менән бергә йәшәгән. Ире йәшләй үлеп киткәс, ете баланы ҡәйнәһе менән бергәләп аяҡҡа баҫтырғандар. Бөгөн инде 23 йыл үҙе ҡәйнә булып, кинйә улының ғаиләһенә терәк-таяныс булып йәшәй. "Миңеңсә, йәш килендәрҙең оло тормош юлы үткән ҡәйнәләре менән бер һүҙҙән булыуы, мәсьәләләр килеп тыуһа, уның менән кәңәш-төңәш итеүе уларҙың татыу, берҙәм булыуына килтерә лә инде", -тине ул. 80 йәшкә етеп барған апай үҙен борсоған мәсьәләне лә күтәрҙе: "Бөгөн ауылдарҙа ҡатындарҙың эсеүенә йөрәгем әрней, борон башҡорт ҡатындары ул ағыуҙы ауыҙына ла алманы бит, балаларына ниндәй тәрбиә күрһәтә улар? Шуларға ҡарата ҡаты саралар күрергә кәрәктер ул..."

Был темaны дауам итеп, педагогия хеҙмәте ветераны Зөлфирә Минһажева ла үҙ фекере менән уртаҡлашты: "Был афәттән ҡотолоуҙы халыҡтың дингә килеүендә күрәм. Ағинәйҙәргә ауылдарҙа эшләп торған мәсеттәргә кешеләрҙе күберәк йәлеп итеү юлын табырға кәрәк. Тыуған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә лә өләсәй-олатайҙарҙың роле ҙур. Ейәндәребеҙ менән үҙ телебеҙҙә һөйләшеп, уларға башҡорт әкиәттәрен, риүәйәт-легендаларын һөйләү ҙа башҡорт теленә һөйөү уятыр ине", - тине һәм эшһеҙлек, эскелек темаларына яҙылған үҙенең шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

Рысҡужа ауылынан өс киленгә ҡәйнә булған 70 йәшлек Фатима Һибәтова:"Килен менән ҡәйнә бер-береһен хөрмәт итһә, уларҙың мөнәсәбәте ниндәй генә шарттарҙа ла яҡшы була", - тине. Айһылыу Хәсәнованың сығышынан иһә, тормош көтөкөндә сабыр, түҙемле булырға өйрәнеү һәр кем менән мөнәсәбәт ҡорғанда ла төп шарт, тип иҫәпләүен белдек. Әбделгәзенән Флүрә Килдейәрова ла бер ауыр һүҙ әйтмәй, ҡәйнәһен ыңғайына һыпырып ҡына бергәләп донъя көткән Гөлназ килененән бик ҡәнәғәт булыуын белдерҙе. "Ғаилә - бәләкәй дәүләт. Өйҙә тыныслыҡ, татыулыҡ булһа, ғаилә ныҡый, үҫә. Ҡәйнә менән килен татыу булһа - ғаилә тарҡалмай. Йәш ағасты күсереп ултыртҡан кеүек, йәш килен нығынып китһен өсөн ҡәйнә кешенең уға терәк булыуы, ярҙамы бик кәрәк. Киленгә инде ҡәйнәнең һүҙен тотоу мөһим. Шулай булғанда, кәңәшле эш тарҡалмаҫ, тигәндәй, һәр нәмәлә эштәре уң, ғаиләләре ныҡ буласаҡ", - тигән фекерен еткерҙе Зөһрә Дәүләтшина. Фәниә Ҡужәхмәтова ҡәйнәһе Хәтирә инәйҙең бөгөн инде үҙҙәре ҡәйнә булған килендәрен ҡыҙҙары кеүек яҡын күреп, улар өсөн әҙәләп тороуы, бөтә ейән-ейәнсәрҙәрен, бүлә-бүләсәрҙәрен тәрбиәләүҙә ҡатнашыуы өсөн рәхмәтле булыуын йәшермәне.

- Һоҡланып тыңланым барығыҙҙың да сығышын. Төрлө кино-спектаклдәр ҡарап, килен менән ҡәйнә араһында мотлаҡ кире мөнәсәбәттәр генә була тип күҙ алдына килтерә ҡайһы берәүҙәр. Тик был беҙҙең милләткә хас түгел бит. Беҙҙең башҡортта ҡәйнә өсөн килен - үҙ ҡыҙы, кейәүе - үҙ улы һымаҡ булған борон-борондан. Ситтәр миҫалында түгел, үҙ миҫалыбыҙҙа тәрбиәләргә кәрәк балаларҙы, йәштәрҙе. Бына һеҙҙең миҫалды еткерергә кәрәк башҡаларға ла. Был фәһемле һөйләшеүҙән, "Киске Өфө" гәзитендә "Ҡәйнә һәм килен" рубрикаһы асырға кәрәк, тигән уй килде әле башҡа. Һеҙҙең аҡыл, тормош тәжрибәһе күптәргә һабаҡ булырлыҡ, ошондай ғаиләләрҙән фәһем алып, киләсәктә татыу ҡәйнә-килендәр һаныи арттырыуға гәзит тә үҙ өлөшөн индерер, - тине Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы.

Танылған шағирә Зөлфиә Ханнанова ла килен-ҡәйнә мөнәсәбәтенә үҙ фекерен белдерҙе. Уның кисәгә ауаздаш булған башҡорт теле, тыуған ер, әсәй, ҡәйнә тураһындағы йөрәктәргә үтеп инерлек шиғырҙарын кисәлә ҡатнашыусылар күҙ йәштәре аша тыңланы. Фәһемле кисәне урындағы үҙешмәкәр артистарҙың моңло йырҙары, дәртле бейеүҙәре биҙәне.

**Рәмилә ИСТАНБАЕВА.**
**Әбйәлил районы.**



**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Гәзит уҡыусылар ҡолағына элгәндәр: "Киске Өфө"нөң яңы "Ҡәйнә һәм килен" рубрикаһына ҡәйнәләрҙән, килендәрҙән матур тормош тәжрибәһен һүрәтләгән сығыштар, хаттар көтәбеҙ. Телефон аша шылтыратып һөйләргә лә була. 252-39-99 телефонына шылтыратһағыҙ, һеҙҙе Фәүзиә Миҙхәт ҡыҙы Мөхәмәтшина тыңлар һәм яҙып алыр.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (1) дүшәмбе | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 21 (2) шишәмбе | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |
| 22 (3) шаршамбы | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |
| 23 (4) кесе йома | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 24 (5) йома | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 25 (6) шәмбе | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 26 (7) йәкшәмбе | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 ноябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия 16+
**19 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**24-25 ноябрь Премьера "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 ноябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**18 ноябрь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен)
**19 ноябрь "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер) 0+
Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

*Батша уҙ көсөҙләгән танып, тәхетенән китергә иткәндә генә батшабикә уны туҡтата һәм: "Әйҙә, беҙ ҙә барыһы ла әскән сығанаҡтан һыу эсәйек. Шул саҡта беҙ ҙә улар кеүеккә әйләнербеҙ", - ти.*



ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# ЯҢЫ МИҘГЕЛ -

## яңы ҡыуаныстар



**Яңы ижад миҙгеле - сәнғәт яратыусылар өсөн үтә күңелле мәл. Театрҙар яңы премьералар, яңы тамашалар менән ҡыуандыра. Өфөлә урынлашҡан башҡорт театрҙарында ниндәй яңылыҡтар бар, тигән һорауға яуап эҙләп, тәүге һуҙҙе М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына бирмәксебеҙ. Яңы, 98-се ижад миҙгеле тураһында театрҙың әҙәби бүлеге етәксеһе Эльвира ИСҠУЖИНА һөйләй:**

- Һәр ваҡыттағыса, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ҡыуаныслы хәбәрҙәр етерлек. Әле генә бер төркөм актерҙар Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Ш. Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына лайыҡ тип табылды. Улар - театрҙың режиссеры Илсур Ҡаҙаҡбаев, артистар Урал Әминев, Ринат Баймырҙин, Артур Кәбиров, Фәнис Рәхмәтов. "Антигона" спектакле "Алтын битлек" Рәсәй милли театр премияһына 7 номинацияла дәғүә итә. Былар барыһы ла театрҙың уңышы. Миҙгел асылыу менән театрҙа "Театр+" проекты үҙенең эшен башланы. Быйыл ул яңы форматта эшләй. Ниндәйҙер бер спектаклде ҡарағандан һуң, фекер алышыуҙар, белгестәрҙең сығыштары була, йәғни, ул белем биреү маҡсатын да эҙәрлекләй. "Театраль ҡунаҡхана" ла үҙенең ишектәрен асасаҡ. "Самрау" балалар театр студияһы ла әүҙем ижад итә. Был студия эшләй башлағанға ла 5 йыл булып китте, ошо датаға бәйле декабрь айында йәш актерҙар тамашасы алдында сығыш яһаясаҡ. Әйткәндәй, студияны быйыл тамамлаған 10 уҡыусының 2-һе илдең театр вуздарына уҡырға инде. Гастролдәр ҙә ҡаралған, Силәбе, Свердловск өлкәләренә, Санкт-Петербургҡа барыу хаҡында һөйләшеүҙәр алып барыла. Киләһе йылдың апрелендә Бахрушин музейында театрҙың күсмә күргәҙмәһе буласаҡ.

Театр сәхнәһендәге быйылғы тәүге премьера 24-25 ноябрҙә тәғәйенләнгән. Ул Гүзәл Яхинаның "Зөләйха күҙҙәрен аса" романы буйынса ошо уҡ исемдәге спектакль. Романдың инсценировкаһын драматург Ярослава Пулинович яҙҙы. Режиссеры - Айрат Абушахманов. Режиссер үҙе билдәләүенсә, спектакль романды сәхнәләштермәй, ә роман өҙөктәре буйынса төҙөлгән тулы сәхнә әҫәре буласаҡ. Туфан Миңнуллиндың "Эҙләнем, бәгерем, һине..." пьесаһы өҫтөндә лә эш бара. Уның режиссеры - Азат Нәҙерголов. Премьера 8-9 декабргә тәғәйенләнгән. Режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев Яңы йыл әкиәте өҫтөндә эшләй. Дюла Урбандың "Бар сысҡандар ҙа сыр ярата" тип аталған әҫәре сәхнәгә сығасаҡ. Кескәй тамашасыларҙы сағыу итеп биҙәлгән, күңелле, заманса ҡуйылған Яңы йыл әкиәте көтә. Ул башҡорт һәм рус телдәрендә барасаҡ.

Шулай уҡ ошо көндәрҙә генә яңы пьеса буйынса эш башланды. Александро Касонаның "Ағастар баҫып үлә" пьесаһы ул. Ғөмүмән, яңы спектакль тамашасылар өсөн дә, актерҙар өсөн дә һәр саҡ матур бүләк.

Юбилей саралары ла көтөлә быйыл театрҙа. Рәсәйҙең, Башҡортостандың, Татарстандың халыҡ артисы Фидан Ғафаровтың юбилейына арналған сара бик матур үтте. Хәҙер инде Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Нурия Ирсаева, Башҡортостандың халыҡ артистары Рәмзиә Хисамова менән Сара Буранбаевалар҈ың юбилейҙары көтә беҙҙе.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ла яңы ижад миҙгелен аса. 23 ноябрь тамашасыларға "Ҡабатланмаҫ мәл" тип аталған яңы программа тәҡдим ителәсәк. Филармония тарихында тәүге тапҡыр үҙенсәлекле майҙан ойошторола - музыкаль ярыш - МоңRingШоу. Унда филармонияның талантлы, дәртле йәштәре Башҡортостан эстрадаһында күптән үҙенең урынын тапҡан сәхнә йондоҙҙары менән осраша. Музыкаль рингтар ойоштороуҙа ҙур тәжрибә туплаған промоутер - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Асҡарова был юлы көйәрмәндәргә нимә тәҡдим итер? Сәмле бәйгелә кем еңеү яулар? Тамашасы үҙ баһаһын кемгә бирер? Ошо һорауҙарға яуаптар табырға сәхнә аҡһаҡалдары, эстрада мэтрҙары - рефириҙҙәр Азат Айытҡолов, Нәзифә Ҡадирова, Вәхит Хыҙыров, Ғәли Алтынбаев, Хәлит Фәтихов һәм Вәлит Илембәтов ярҙам итәсәк.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**81. Салауат Әбүзәр "Йыһан емеше" китабы.** Замандаш шағирҙар араһында етди темаларға ла, лирик шиғырҙарҙы ла оҫта ижад итә Салауат Әбүзәр. Уның кинәйәле шиғри юлдарында сәйәси, ижтимағи, социаль тормош тураһында, башҡорт кешеһен борсоған һорауҙарға яуап табырға була. "Йыһан емеше" тип аталған шиғырҙар йыйынтығында әҙиптең "Ир ҡанаты" тигән поэмаһы һәм ике йөҙ шиғыры ингән. Был китап шиғриәт һөйөүселәр күңелен арбамай ҡалмаҫ.

**82. Зөлфиә Ханнанова шиғырҙары.** Шағирәнең дүрт йыйынтығы бар, ҡайһыныһын ҡулға алһаң да хисле, рухлы, уйлы шиғриәт донъяһына сумаһың. 2004 йылда сыҡҡан "Килен тәңкәһе" китабы өсөн Зөлфиә Ханнановаға Ш. Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы бирелгән. Ә һуңғы йылдарҙа гәзит-журналдарҙа баҫылған шиғри шәлкемдәре шағирәнең заман проблемаларына битараф булмауын сағылдыра. Башҡорт халҡының үткәне, бөгөнгөһө, киләсәген ҡайғыртып яҙған шиғри юлдары бигерәк тә күңелгә үтеп инә, йөрәктә ғәм, йоҡлаған аңды уятырлыҡ. "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә Зөлфиә Ханнанованың аныҡ бер генә китабын индермәй, ғөмүмән, бер шиғырын да иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаҫҡа кәңәш итергә була.

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына** ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иңдәрҙен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбән хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы"** тип аталған фекер алышыу битендә **"#башкитап"** хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДАН ҠИММӘТ ТОРА,

## әммә тиҙ боҙола

Дан ҡаҙаныр өсөн 40 йыл һүрәт төшөрөргә, йәки 20 йыл китап яҙырға, йәки 10 йыл театрҙа төп ролдәрҙә уйнарға, йәки 5 йыл киноға төшөргә, йә... бер ай буйы көн һайын телевидение аша кулинар рецептар уҡырға кәрәк.

**(Веслав Брудзиньский).**

Дан - ул йүнле тауар түгел. Ҡиммәт тора, әммә тиҙ боҙола.

**(Оноре де Бальзак).**

Миндә әҙәби талант булмағанын белер өсөн миңә илле йыл кәрәк булды. Әммә мин ул осорға танылған яҙыусы инем инде.

**(Роберт Бенчли).**

Йылмайған ҡыҙ-ҡатынға һәм илаған ир-егеткә ышанма һис.

**(Көнсығыш мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батшалыҡта көслө сихырсы йәшәгән. Бер саҡ ул тылсымлы дарыу яһай ҙа, уны батшалыҡтағы бар кешеләр ҙә эскән һыу сығанағына һала. Уны эсеүселәр шунда уҡ аҡылдан яҙа. Батшаның ғаиләһе икенсе бер сихырсы белмәгән сығанаҡтан һыу эсә һәм шуға ла улар ғына үҙ аҡылында ҡалеш ҡала. Бар батшалыҡтың аҡылдан яҙғанын, бөтөн ерҙә тәртипһеҙлек хөкөм һөргәнен күргән батша, халҡын аҡылға килергә, тәртипкә күнергә саҡырып, төрлө указдар, күрһәтмәләр сығара башлай. Ләкин батшаның вәзирҙәре һәм яҡындары, батша аҡылһыҙ эш ҡыла, тип, уның күрһәтмәләрен ҡабул итмәй һәм батшаны үҙ тәхетенән баш тартырға саҡыра. Батша үҙ көсөҙләгән танып, тәхетенән китергә иткәндә генә батшабикә уны туҡтата һәм: "Әйҙә, беҙ ҙә барыһы ла әскән сығанаҡтан һыу эсәйек. Шул саҡта беҙ ҙә улар кеүеккә әйләнербеҙ", - ти. Шулай эшләйҙәр. Быны күргән вәзирҙәре, батша шундай аҡыллы ҡарарға килгән икән, ул артабан да хакимлыҡ итергә тейеш, тип, үҙ талаптарынан баш тарта. Илдә тыныслыҡ урынлаша. Шул уҡ ваҡытта күрше батшалыҡтарҙағы халыҡ бөтөнләй икенсе төрлө көн күрә. Күпмелер замандан һуң баяғы сихырсының улы ла үҙенең тылсымлы дарыуын уйлап таба һәм бер инешкә ҡойоп, шул инеш аша бар Ер шарындағы һыу сығанаҡтарын ағыулай. Шулай итеп, Ер шарындағы бар халыҡ аҡылдан яҙа. Тик был турала бер кем дә белмәй. Ләкин ҡайһы саҡта һыуҙың ағыуы тәьҫиренә бирешмәгән кешеләр ҙә тыуа Ер йөҙөнә. Улар аҡыллы булып үҫеп етә, хатта ҡалғандарға уларҙың аҡылһыҙлығы, етешһеҙлектәре тураһында аңлатып та маташа. Тик уларҙы аҡылдан яҙғанға иҫәпләп, бер әү ҙә тыңламай. Быуна шулай йәшәйбеҙ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2343/11